ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 май (һабанай) 2025

№20 (1164)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 995 һум 76 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡыл теүәллеге бир, хоҙайым!**



2-3

**Изгелек - еңеүсе көс!**

"Урал батыр" эпосындағы ошо көс - беҙҙең йәшәү ҡағиҙәһе



8-9

**"Тамырһыҙ кешеләр оҙаҡ йәшәмәй",**

йәғни, Хирург Углов нәсихәттәренән



9

**Хыянатһыҙ милләтбеҙ беҙ...**



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР

**Өфө ҡалаһының "Торатау" конгресс-холында дүртенсе тапҡыр "Атайсал - кесе Ватан" форумы үтте. Был мөһим сарала республиканың әүҙем халҡы, шулай уҡ Башҡортостанда тыуып-үҫеп ҡанат нығытҡан, бөгөн илдең төрлө төбәгендә йәшәгән ватандаштарыбыҙ, изге уйлы, изге ниәтле меценаттар, әүҙем эшҡыуарҙар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашты. Кескәй Ватанға һөйөү берләштергән был илһөйәрҙәр, төрлө йүнәлештәге фекер алышыу майҙансыҡтарына йыйылып, "Атайсал" проекты һөҙөмтәләрен, уңыштарын, еңеүҙәрен барланы, киләсәккә эш йүнәлештәре тураһындағы фекер-идеялар менән уртаҡлашты.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әйткәнсә, рухи яҡтан яҡындарҙы берләштергән "Атайсал" хәҙер проект ҡына түгел, ә тыуған төйәктәрен яратыусылар хәрәкәте, берҙәмлек символы, мөһим эштәргә нигеҙләнгән дөйөм милли хәрәкәт ул. Эйе, хаҡ һүҙҙәр. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров форумдың пленар ултырышында ошоно раҫлаусы ҡайһы бер һандар-факттарҙы телгә алды, унда ҡатнашыусыларға кесе Ватанға ярҙам иткәндәре өсөн рәхмәт әйтте, дәүләт наградаларын һәм иҫтәлекле билдәләр тапшырҙы.

- Беҙҙең форум ысын патриоттарҙы йыйҙы. Һеҙгә тыуған ергә тоғролоҡ өсөн ихлас рәхмәт белдерәм, - тип һыҙыҡ өҫтәнә алды Радий Хәбиров. - Беҙҙең проект артабан да үҫешә, үҙенең форматын киңәйтә. Әгәр башта был тыуған ауыл йәки ҡала мәнфәғәттәрен генә күҙҙә тотҡан хәрәкәт булһа, бөгөн ул беҙҙең уртаҡ берҙәмлектең сағылышы булып тора. "Атайсал" Башҡортостандан ситтә уңышҡа өлгәшкәндәрҙе берләштерә һәм үҙенең кесе Ватанына ярҙам итә. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеүселәр ҙә байтаҡ. "Атайсал" республикаға һәм бөтә илгә файҙа килтергән, мөһим эштәргә нигеҙләнгән дөйөм милли хәрәкәткә әйләнә, тип әйтергә була. Проект тормошҡа ашырыла башлағандан алып унда 7,5 мең кеше ҡатнашҡан. Ә тормошҡа ашырылған башланғыстар һаны 31 меңгә етте. Был маҡсатҡа 1,7 миллиард һумдан ашыу аҡса йәлеп ителгән. Изге эштәр исемлеге бик ҙур. 950 балалар һәм спорт майҙансығы йыһазландырылды, 500-ҙән ашыу мәсет һәм сиркәү төҙөлдө һәм ремонтланды. 1 меңгә яҡын зыярат, 2 меңдән ашыу һәйкәл һәм обелиск тәртипкә килтерелде, 900-ҙән ашыу шишмә төҙөкләндерелде", - тип хәбәр итте Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеүгә өлөш индергән, гумконвойҙар ойоштороуҙа ҡатнашҡан, яугирҙар өсөн кейемһалым һәм әйберҙәр теккән, геройҙарҙың ғаиләләренә ярҙам иткән яҡташтарға рәхмәт белдерҙе. "Бөгөн Беҙ Ватанға анығ эштәр менән ярҙам итеүселәргә, уның мәнфәғәттәрен яҡлауҙа ныҡлы тороусыларға рәхмәт әйтәбеҙ. Был беҙҙең илһөйәрлегебеҙҙе сағылдыра", - тине Радий Хәбиров.

**(Дауамы 12-13-сө биттә).**

АФАРИН!

# БЕҘҘЕҢ ШАШКАСЫЛАР!

**Башҡортостандың йыйылма командаһы Ташкентта йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса донъя чемпионатында уңышлы сығыш яһаны һәм барлыҡ алтын миҙалдарҙы яуланы.**



Ярыштарҙы ШОС һәм БРИКС илдәренең халыҡ-ара ассоциацияһы нигеҙендә булдырылған Халыҡ-ара шашка ассоциацияһы ойошторҙо. Чемпионатта туғыҙ илдән: Рәсәй, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Төркмәнстан, Ҡырғыҙстан, Иран, Афғанстан, Һиндостандан 120-нән ашыу спортсы ҡатнаша. Илебеҙҙән - ике йыйылма команда, береһе тулыһынса тиерлек Башҡортостан спортсыларынан тора, икенсеһе - Саха (Яҡут) Республикаһынан.

Беҙҙең команда составында: Александр Георгиев, Айнур Шәйбәков, Муродулло Амриллаев, Марсель Шәрәфетдинов, Тамерлан Әхмәров, Анатолий Татаренко һәм Александр Гетманский. Ҡатын-ҡыҙҙар командаһында: Тамара Танһыҡкужина, Айгөл Иҙрисова, Әлиә Әминева, Айгизә Мөхәмәтйәнова, Агата Парахина, Кристина Осипова һәм Елена Мильшина.

Шашкасылар һуңғы өс йылда тәүге тапҡыр халыҡ-ара турнирҙа ҡатнаша. "Был ваҡиғаны өс йыл көттөк, сөнки спортсыларыбыҙ, хаҡлы рәүештә танылған лидерҙар булһа ла, донъя чемпиондары исемен яҡлау мөмкинлегенән мәхрүм ителде. Беҙҙекеләр юғары кимәлде раҫланы һәм команда чемпионатында алты алтын миҙалдың барыһын да алды", - тине Рәсәйҙең шашка буйынса йыйылма командаһының баш тренеры Юрий Черток.

Әйткәндәй, Башҡортостан шашкасылары күптән түгел Мәскәү өлкәһендә үткән Халыҡ-ара шашка буйынса Рәсәйҙең команда чемпионатында ла дүрт миҙал яулағайны. Республиканың ҡатын-ҡыҙҙар йыйылма командаһы ике алтын миҙал алды. Команда составында Айгөл Иҙрисова, Кристина Осипова һәм Агата Парахина сығыш яһаны. Ир-егеттәр командаһы ла алтын һәм көмөш миҙал яулап, яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте. Уның составында: Александр Георгиев, Муродулло Амриллаев, Айнур Шәйбәков, Марсель Шәрәфетдинов һәм Владимир Мильшин. Чемпионат йомғаҡтары буйынса донъя командаһы чемпионатына милли йыйылма составы билдәләнде.

12+

✓ *Йәмғиәт һәм граждандар именлегенә ни тиклем хәүеф янай бөгөн ундай агрессив психикалы сирлеләрҙән! Былтыр ғына ла Башҡортостанда 7305 кешегә психик ауырыу диагнозы ҡуйылған.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҺАБАНТУЙҘАР ҠАСАН?



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылда "Һабантуй" халыҡ байрамын үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Республика етәксеһе указына ярашлы, тәүгеләрҙән булып һабан байрамы **31 майҙа** Ауырғазы, Бишбүләк, Йылайыр, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Күгәрсен, Стәрлетамаҡ, Ҡалтасы, Яңауыл һәм Шишмә райондарында ойошторола. **6 июндә** Ейәнсура, Нуриман, Хәйбулла райондарында һабантуйға барырға мөмкин. **7 июндә** Әбйәлил, Архангел, Аҫҡын, Баҡалы, Баймаҡ, Бөрө, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Ҡариҙел, Кушнаренко, Мәләүез, Миәкә, Стәрлебаш, Өфө, Саҡмағош райондарында һабантуй үткәрелә. **12 июндә** Әлшәй, Балтас, Бәләбәй, Балаҡатай, Благовар, Благовещен, Борай, Дәүләкән, Дыуан, Иглин, Илеш, Ҡыйғы, Краснокама, Мәсетле, Тәтешле, Учалы, Федоровка һәм Шаран райондарында һабан байрамы ойошторола. **14 июндә** - Туймазы, Салауат, Бүздәк һәм Мишкә райондарында, **20 июндә** Көйөргәҙе районында һабантуй була. **21 июндә** Ғафури һәм Ишембай райондары игенселәре һабан байрамын билдәләй. Белорет районында һабантуйҙы 19 июлдә үткәреү планлаштырыла.

## ТҮЛӘҮЛЕ ТУҠТАЛҠАЛАР

**1 майҙан Өфөлә түләүле парковкалар буйынса кол-үҙәк эшләй башланы. Ҡала халҡы, +7 (347) 246-68-66 телефоны буйынса шылтыратып, парковка өсөн түләү, мөмкин булған льготалар һәм түләүле парковкалар эше тураһында консультация ала аласаҡ. Шулай уҡ был телефон аша түләү йәки башҡа техник мәсьәләләр булған осраҡта мөрәжәғәт ҡалдырырға, уны яуаплы белгестәргә ҡарау өсөн тиҙ арала тапшырырға мөмкин.**

Түләүле парковкалар түбәндәге адрестар буйынса ҡаланың 9 участкаһында буласаҡ: Карл Маркс урамында (Зәки Вәлиди урамынан Достоевский урамына тиклем), Пушкин (Аксаков урамынан Яңы күпер урамына тиклем), Коммунистар (Аксаков урамынан Дорофеев урамына тиклем), Чернышевский (Гоголь урамынан Цюрупа урамына тиклем), Мостай Кәрим (Коммунистар урамынан Достоевский урамына тиклем), Ленин (Пушкин урамынан Революцион урамына тиклем), Киров (Мостай Кәрим урамынан Цюрупа урамына тиклем), Достоевский (Ленин урамынан Цюрупа урамына тиклем) Һәм Октябрь революцияһы (Ленин урамынан Яңы күпер урамына тиклем).

Тәүҙә түләүле парковкалар тест режимында эшләй. Улар 2025 йылдың июнендә тулы ҡеүәткә эшләй башлаясаҡ. Аныҡ көнө Өфө хакимиәтенең айырым документында индереүгә 30 көн ҡалғас билдәләнәсәк.

БАНАҒАЙЫШ!

**Беҙҙә табиптарға йөрөүсе ауырыуҙар күп; эйе, халыҡтың сәләмәтлек торошо яҡшырғандан-яҡшыра бармай, үкенескә. Кемдәргә мөрәжәғәт итә һуң медицина ярҙамына мохтаждар? Иң тәүҙә, әлбиттә, участка терапевына - яҙыла алһа. Артабан - кардиолог, невролог, гастроэнтеролог. Лор табип менән күҙ ауырыуҙары белгесе кабинетына ла һәр ваҡыт оҙон сират була.**

# АҠЫЛ ТЕҮӘЛЛЕГЕ БИР, ХОҘАЙЫМ!



Терапевҡа яҙыла алһаң, тигәнем шунан, уға, ысынлап та, һуңғы йылдарҙа эләгеүе ауырлаша бара. Яҙылған хәлдә лә, терапевт кабинетында һине генә көтөп ултырмайҙар, әлбиттә. Табип башын да күтәрмәй ниҙер яҙа йә компьютерҙан айырыла алмай ғына анамнезыңды һораша башлай. Ә бит ул иң тәүҙә пациенттың ҡиәфәтенә, йөҙөнә, үҙен тотошона иғтибар итергә тейеш. Ярай быныһы. Иң борсоғаны - уларҙың ҡабаланыуы. Быны ла аңларға була: коридорҙа кабинет ишеге төбөндә тағы тиҫтәләгән кеше сиратта тора. Үпкәләштән булмаһын, тигәндәй, терапевт барыбер ҙә билдәле бер йүнәлештә махсуслашҡан белгес түгел, ә сирлегә дөйөм, визуаль планда ҡарай. Былай тип әйтергә хаҡым да юҡтыр, бәлки, ләкин үҙ ғүмеремдә тик бер генә, уныһы ла сит участканыҡына осраҡлы эләгеп, киң ҡарашлы, төрлө яҡлы белемгә эйә терапевты осрата алдым. Үкенескә, ул да хаҡлы ялға китте инде...

Борсоу ғына түгел, хафаға һалғаны ла шул: ҡайһы ғына табипҡа барма, үҙ поликлиникаңамы, түләүлеһенәме, дарыу яҙып сығара ла - эш тә бөтә, ә сирле үҙ проблемалары менән ҡала бирә. Илдә генә түгел, донъя күләмендә был йәһәттән фармацевтика баҙарында монополистар идара итеүе һәм был өлкәне контролдә тотоуҙары мәғлүм, әлбиттә, тик шулай ҙа дарыу төймәләрен икмәк урынына ашауын дауам итә кешелек - ҡайҙа барһын. Әгәр уны дарыу - сәләмәтлекте ҡайтарыусы сара, тип ышандырғандар икән.

Дарыуға көнө лә һирәгерәк төшөр ине, бәлки, кешенең, әгәр беҙҙә дауалау-иҫкәртеү саралары бергә алып барылһа.

Профилактика, ни тиһәң дә, диспансерлаштырыуҙан ғына ғибәрәт түгел бит. Кешенең сәләмәт тормошҡа ынтылышын дәүләт кимәлендә күтәрмәләү, бының өсөн һәр кемгә мөмкинлек булдырыу - ул беҙҙең йәшәү шарттарында мөмкин булмаған нәмәлер, моғайын, сөнки әлеге шул профилактика сараларында мөһим булған дөрөҫ һәм сәләмәт туҡланыу мәсьәләһенең генә лә сылбыры күптән өҙөлгән: бөтөн ризыҡ составы зарарлы ҡушымталар, химия менән ашланып етештерелә һәм үҫтерелә. Саф, таҙа ризыҡ экологик яйлыраҡ төпкөл ауылдарҙа ла хатта һирәгерәк осрай бара: глютенлы бөртөклөләрҙән он, ярмаларҙы улар ҙа уртаҡ "табаҡтан" - магазиндан һатып ала бит.

Теманан ситкәрәк сығып кителһә лә, һаулыҡ һаҡлауҙа бөтөн мәсьәләләр ҙә бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән һәм бер үк сәбәп-һөҙөмтәгә килтерә икәнен дә беләбеҙ. Физик сәләмәтлек торошо, етешһеҙ көнкүреш шарттары, фәҡирлек, ҡайғы-хәсрәт һәм эскелектең йән рәнйеү сире менән бәйләнеше лә алыҫ түгеллеген тойомларға була.

Әйткәндәй, ошо араларҙа ғына Яндекс яңылыҡтар таҫмаһында бирелгән шундай мәғлүмәт шаңҡытты: Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы асыҡлауынса, Башҡортостанда башҡа төбәктәргә ҡарағанда психик сирҙәр менән яфаланыусылар күберәк булып сыҡҡан: республика ил буйынса был исемлектә Мәскәү менән Санкт-Петербург һәм, ни бары 100 кешегә генә ҡалышып, Татарстандан һуң дүртенсе урында килә. Башҡортостанда былтыр 150 203 кеше психик тайпылыштар буйынса табипта иҫәптә торһа, 2023 йылдағынан хәл үҙгәрмәгән, ни бары 128 кешегә генә кәмегән. Был медицина учреждениеларына мөрәжәғәт иткәндәре генә, ә күпме сирле табипҡа бармай, үҙ алдына ҡаңғырып йөрөүен дауам итә? Уйлауы ла ҡурҡыныс. Ундай кешеләрҙең нормаль булмаған, башҡалар өсөн хәүефле ҡылыҡтарын видеокүҙәтеү камераларынан алып йыш ҡына социаль селтәрҙәргә лә һалалар: Аллаһ һаҡлаһын, ундайҙарға тош итмәһен, тип теләргә генә ҡала. Йәмғиәт һәм граждандар именлегенә ни тиклем хәүеф янай бөгөн ундай агрессив психикалы сирлеләрҙән! Былтыр ғына ла Башҡортостанда 7305 кешегә психик ауырыу диагнозы ҡуйылған, ә Рәсәй буйынса тотош алғанда былтыр 4 млн 11 мең 508 сирле теркәлгән. Әлбиттә, ҙур ҡала Мәскәүҙә иң күбе - 248 120, Мәскәү өлкәһендә 203 353 һәм Санкт-Петербургта 179 787, Башҡортостанда, үрҙә әйтеп кителеүенсә, 150 203 кеше.

Был хәлдең төп сәбәбен белгестәр COVID-19 эпидемияһы һөҙөмтәһе, тип тәкрарлай, ләкин бөтә бәләләрҙә ғәйепле COVID-19-ҙан алда уҡ әле, 2018 йылдың февралендә, мәҫәлән, Башҡортостанда ул ваҡыттағы республика Башлығы Рөстәм Хәми-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Мәскәүҙә "Берҙәм Рәсәй" партияһының Генераль советы секретары Владимир Якушев менән осрашты. Радий Хәбиров унаң менән төбәк бүлексәһенең эше һәм республикала партия проекттарын тормошҡа ашырыу тураһында һөйләште. "Берҙәм Рәсәй" ҡатнашлығында республикала мәктәптәр төҙөүҙе һәм капиталь ремонтлауҙы, ФАП-тарҙы, почта бүлексәләрен ремонтлауҙы, мәҙәниәт учреждениеларын йыһазландырыуҙы, йәмәғәт киңлектәрен төҙөкләндереүҙе дауам итәбеҙ. Бергәләп төп геройҙарға - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итәбеҙ", - тип яҙа Радий Фәрит улы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Был аҙнала Өфөлә Республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусын асыу планлаштырыла, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Хәбәр итеүенсә, дөйөм майҙаны яҡынса 32 мең квадрат метрлыҡ туғыҙ ҡатлы бина 2019 йылдың июлендә төҙөлә башлағайны. Бында диагностика кабинеттары менән ҡабул итеү бүлеге, поликлиника, реанимация менән 10 операция блогы, рентгенохирургия һәм кардиохирургия бүлексәләре, стерилизация комплексы, административ блок һәм дарыухана-бүлеү пункты урынлашҡан. "Был минең өсөн иң ҙур һәм әһәмиәтле объект булып тора. Республикала йәшәүселәр, бер ҡайҙа ла китмәйенсә, ошонда кардиоярҙам алырға тейеш", - тип билдәләне республика етәксеһе.

✓24 майҙа Башҡортостан мәктәптәрендә "Һуңғы ҡыңғырау" байрамы үткәрелә. Республика ҡануниәтенә ярашлы, был көндө иҫерткес эсемлектәр һатыу ҡәтғи тыйыла, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында. Һабантуйҙар ойошторолған муниципалитеттарҙа ла ошондай сикләү индерелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала һабан байрамдары 31 майҙан 19 июлгә тиклем ойошторола. Бынан тыш, июндең һуңғы шәмбеһендә билдәләнгән Йәштәр көнөндә лә хәмер һатырға ярамай (быйыл иһә 28 июндә). Тәжрибә күрһәтеүенсә, әлеге сикләү йәмәғәт тәртибен тәьмин итеүҙә һөҙөмтәле, ә республика халҡы быны аңлап ҡабул итә, тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

✓Башҡортостандың Торлаҡ һәм төҙөләш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты рәйесе тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указына ярашлы, Илшат Сәйетов - Башҡортостандың баш дәүләт торлаҡ инспекторы. Ул 1980 йылдың 8 апрелендә Дүртөйлө районының Гөблөкөсөк ауылында тыуған. Өфө дәүләт нефть техник университетын, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын, Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамлаған. Һуңғы эш урыны - Башҡортостан Республикаһы Башлығы Контроль идаралығының бүлек мөдире, начальник урынбаҫары.

тов фән буйынса совет ултырышында психик сирләләр һаны артыу сәбәпле борсолоу белдереп, был проблема менән шөғөлләнергә тейешле фәнни үҙәк асырға тәҡдим итә. "Үҫешкән баҙар иҡтисадлы илдәрҙә бындай сирлеләргә психика-терапевтик ярҙам юғары кимәлдә ҡуйылған, унда күп кеше персональ психотерапевт хеҙмәте менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә", - ти Р. Хәмитов. Шул уҡ ваҡытта ул мәктәптәрҙә, колледждарҙа, вуздарҙа психологик ярҙам хеҙмәтен киңерәк йәйелдергә ҡуша.

Ә унан да алдараҡ, 2011 йылда, И.Әхмәров, Р.Вәлинуров, А.Зәйнуллина составындағы бер төркөм ғалимдар 2008-2010 йылдар эсендә Башҡортостанда шизофрения сиренең таралыуына анализ яһай. Был сир донъя күләмендә ул саҡтағы статистика буйынса 0,8-1 процент сиктәрендә таралған була. Белгестәр шизофренияның күпләп үлемгә (суицид) килтереү фактын, бындай сирлеләрҙең башҡа кешеләр һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн нindәй ҙур ҡурҡыныс тыуҙырыуын, шул уҡ ваҡытта яйһыҙ социаль һәм иҡтисади эҙемтәләргә килтереүен билдәләгән.

Әйткәндәй, әлеге "почетлы" 4-се урын 2019 йылдан бирле урынынан ҡуҙғалмаған. Бынан алты йыл элек тә урындар быйылғы тәртиптә һаҡлана килгән. Был факт та һағайтмай ҡалмай: тимәк, психик сирлеләр проблемаһы шул йылдарҙан бирле үҙ ағышына ҡуйылған, тип уйларға урын бар. Һәр хәлдә, дауалау-иҫкәртеү саралары һөҙөмтәһе күренмәй. Дөрөҫ, тап шул осор ковид эпидемияһының башланып китеүе лә мәсьәләне ситкәрәк этәрергә мәжбүр иткәнде. Бөгөн, ил буйынса миллиондар аҡыл рәнйеүе менән яфаланғанда, нимә көтмәк кәрәк? Фажиғәле хәлдәр, суицид, енәйәтселек, башҡа бәлә-ҡазаларҙымы? Бындай сирлеләрҙең күбеһе медицина ярҙамына мөрәжәғәт тә итмәй. Эскегә бирелгән кеше, мин алкоголик түгел, тип үҙен ышандырырға маташҡан шикелле, былар ҙа үҙҙәренең ауырыуын танырға теләмәй һәм үҙ хәлен баһалай ҙа алмай ҙа торғандыр.

Һәр хәлдә, проблема тупһанан ашатлап ингән икән, уның түргә үтеүен көтөргә ярамай, ә кисекмәҫтән дәүләт кимәлендә медицина ярҙамы ойоштороу сараһын күрергә, атап әйткәндә, йәшәгән урындар буйынса поликлиникаларҙа түләүһеҙ белгестәр хеҙмәтен ойошторорға кәрәк, юғиһә, бөгөн түләүле психотерапевтҡа бер тапҡыр барыу ҙа 3-6 меңгә барып баҫа икән, сирле кеше теләгән хәлдә лә унда яҡын юламаясаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТӨП МАҠСАТ КӨСӨНДӘ ҠАЛА





**Рәсәй менән Украина делегацияларының 16 майҙа булып үткән ни бары ике сәғәтлек осрашыуында ниндәйҙер хәл иткес ҡарарға килеп булмауы уҡыусы балаға ла яҡшы аңлашылалыр. Эксперттар фекеренсә, Рәсәй - Украина делегацияларының был юлы осрашыуы 2022 йылда Киев ғәйебе менән өҙөлгән һөйләшеүҙәрҙән һуң тәүге һынау этабы ғына булды. Алда әле ике яҡты ла тағы күпме шундай этаптар көтәлер - әйтеүе ҡыйын. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Мәскәү был осрашыуҙы ҡәнәғәтләнерлеҡ башланғыс тип тапты.**

Рәсәй делегацияһы етәксеһе Владимир Мединский ике яҡлы һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһен әйтеп бирҙе: беренсенән, яҡтар 1000-гә 1000 кеше иҫәбенән әсирҙәр менән алмашырға килеште; икенсенән, Украина делегацияһының ике дәүләт башлығының күҙмә-күҙ осрашыуын һорауы иҫәпкә алынды; өсөнсөнән, Рәсәй менән Украина утты туҡтатыуҙы нисек күҙаллауҙарын ентекле әҙерләгәндән һуң һөйләшеүҙәрҙе дауам итеү мөмкинлеге тыуҙы. Украина делегацияһы ла үҙ яғында ошондай уҡ пункттар буйынса һөҙөмтә-белдереү яһаны. Шуныһы мөһим, ти күҙәтеүсе сәйәсмәндәр, был осрашыуҙа ике яҡтың да үҙ-ара ышаныс булдырыуға ынтылышы күренде. Сөнки ҡайһы бер мәғлүмәт сығанаҡтары Украина делегацияһын тулыһынса "милитаринацистик" состав тип атағайны һәм был осрашыуҙан улар яғынан ыңғай хәбәр көтмәгәйне. Ысынлап та, делегациялағы 12 кешенең 9-ы көс структуралары хәрбиҙәре, шул уҡ ваҡытта бандеровсы йоғонтоһонда булғандарының да ҡатнашыуы шик тыуҙыра ине. Рәсәй делегацияһы етәксеһе Мединскийҙың әйтеүенсә, дөйөм алғанда, һөҙөмтә ҡәнәғәтләнерлек. Утты туҡтатыу буйынса яңынан көтөлгән ихтимал һөйләшеүҙәр һәм тәҡдимдәр хаҡында тиҙҙән хәбәр ителәсәк, ти ул.

АҠШ-тың Дәүләт секретары Марко Рубио хәбәр итеүенсә, әгәр Мәскәү менән Киев араһындағы һөйләшеүҙәрҙә алға китеш булмаһа, Конгресс тарафынан Рәсәйгә ҡарата санкцияны ҡәтғиләштереү сараһы күреләсәк. Был хаҡта закон проекты Рәсәй нефтен һатып алыусы илдәрҙең тауарҙарына 500 процент пошлина ҡуйыуҙы күҙҙә тота. Ошо йәһәттән Трамптың сәйәсмән булараҡ, тыныслыҡ килешеүенә, айырыуса өс йыл буйы һуғыш барған Украина менән бөгөн үк, ул теләгәнсә, тиҙ генә ҡул ҡуйыуҙың мөмкин булмаған эш икәнен аңларға теләмәүе ғәжәпкә ҡалдыра һәм бала-сағаса ҡыланыуы, туҡтауһыҙ санкциялар менән янауы, шул уҡ ваҡытта Киевты аҡса һәм ҡорал менән тәьмин итеүе аптырата. Германияның Die Zeit баҫмаһы яҙып сығыуынса, Дональд Трамп Владимир Путин менән күҙмә-күҙ осрашҡандан һуң ғына тыныс һөйләшеүҙәрҙә прогресҡа өлгәшеп булырына ышана, ә әлегә ул 19 майҙа Рәсәй етәксеһе менән телефондан һөйләште.

Әйе, утты туҡтатыу буйынса Рәсәй - Украина һөйләшеүҙәре бөтөн донъя иғтибарын йәлеп итте. Был йәһәттән айырыуса Украинаның төп "адвокаттары" - Франция лидеры Макрон, ГФР канцлеры Мерц, Британия премьеры Стармер Рәсәй яғын һөйләшеүҙәрҙә, йәнәһе лә, "килешеп бөтмәҫлек" шарттар ҡуйыуҙа ғәйепләне һәм был мәсьәләне тиҙерәк Трамп ҡолағына киртеүҙе кәрәк тапты. Улар тарафынан "килешеп бөтмәҫлек" тип табылған шарт, ә дөрөҫө, Рәсәйҙең Украинала Махсус хәрби операция алып барыуының логик һөҙөмтәһе, төп маҡсаты - ике арала оҙайлы тыныслыҡ урынлаштырыу, Рәсәй дәүләтенең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү һәм Украиналағы рус телле халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡлау. Ошо буламы инде "ҡабул ителмәҫлек" шарт! Дөрөҫ, бының өсөн конфликттың тәү сәбәптәрен юҡ итеү, йәғни Украинаны ҡоралһыҙландырыу, нацизмды юҡ итеү һәм был илдең нейтраль статусына өлгәшеү кәрәк. Рәсәйҙең Украина конфликтын үҙебеҙгә кәрәкле һөҙөмтә менән тамамларлыҡ көсө лә, саралары ла етерлек, тине РФ Президенты Путин.

Зеленскийҙың һөйләшеүҙәрҙе һуҙа килеүен Верховный Радала ла хупламайҙар. Сөнки, ти Рада депутаты Александр Дубинский, өҫтәмә территорияларҙы һәм кешеләрҙе юғалтыу Украина өсөн отошһоҙ позицияла тороуҙы аңлатасаҡ һәм был позиция һөйләшеүҙәрҙең киләһе раунды һайын насарлана ғына барасаҡ. Ошоно раҫлағандай, 18 майҙа Рәсәй Ҡоралл көстәре Украинаның хәрби объекттарын утҡа тотто һәм уның өҫтөнә күп һанда дрондар осорҙо. Киев һәм Киев өлкәһе һөжүмгә дусар ителде. Рим папаһы менән осрашып ҡайтҡандан һуң 18 майҙа үҙенең Telegram-каналында Зеленский Рәсәй менән конфликтты көйләү һәм реаль һөҙөмтә хаҡына теләһә ниндәй форматта диалогҡа әҙер булыуын белдереп яҙҙы.

Әйткәндәй, 19 майҙа Дональд Трамп менән Владимир Путин ике сәғәттән ашыу Украина конфликтын көйләү буйынса телефондан һөйләште. Улар шул уҡ ваҡытта Рәсәй менән Украина вәкилдәренең "иң юғары кимәлдә" осрашыуы мәсьәләһенә лә ҡағылды. Был һөйләшеүҙән һуң Трамп, Украина конфликты буйынса тыныслыҡ булдырыуға өмөт белдереп, Рәсәйгә санкция иғлан итеү менән ашыҡмай торорға булды.

Һәм тағы. "АҠШ-тың үҙәк өлөшөндә 17 майҙа булып үткән ҡеүәтле торнадо ҡойоно ҡотороуы һөҙөмтәһендә 27 кеше һәләк булды",- тип хәбәр итә The New York Times гәзите. Ҡойон айырыуса Миссури, Кентукки, Сент-Луис ҡалаларына ҙур зыян килтергән: биналар емерелгән, электр линиялары өҙөлгән. Ә бына шул ук көндө Сербияның Ниш ҡалаһында ил президенты Александр Вучич тарафынан йыйылған "Халыҡ һәм дәүләт өсөн" сәйәси платформа презентацияһы митингыһы әлеге Америка ҡойононан һис кәм булмағандыр: ҡала урамдары ғәмәлдәге власть яҡлылар һәм уларға ҡаршы сығыш яһаусы оппозиция вәкилдәре менән шығырым тулған, уларҙың тығыҙ ҡыҫымы аша полиция ла хатта саҡ үтеп инә алды, тип яҙа РЕН ТВ хәбәрсеһе Сергей Петров. Ҡала урамдары ябыҡ, хәрәкәт тулыһынса туҡталған. Бынан бер ай самаһы элек, 13 апрелдә лә Белград үҙәгендә Сербия хөкүмәтен яҡлап, ошондай уҡ митингҡа 20 мең кеше сыҡҡайны. Президент Вучич граждандарҙы "ирекле ихтыяр белдереп, ил берҙәмлеген нығытыу һәм суверенлыҡ" маҡсатына өлгәшергә саҡырҙы. Сербияла хәҙер ярты йылдан ашыу инде ғәмәлдәге власть сәйәсәтенә ҡарата йәштәр, айырыуса студенттар хәрәкәте туҡтамай. Улар былтыр 1 ноябрҙә Нови-Сад ҡалаһында вокзал бинаһының бетон түшәме емерелеп, 16 кеше һәләк булғандан һуң башланып киткәйне. Быйыл марттағы күп һанлы ошондай уҡ митингынан һуң ил премьеры Милош Вучевич отставкаға китергә мәжбүр булды. Президент Вучич әйтеүенсә, студенттар сығышына оппозиционерҙар төҫ бирә. Ләкин Сербияла "майҙан копияһы" булмаясаҡ. Митингыға сығыусыларҙың 99 проценты "төҫлө революцияға" ҡаршы, ти ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Май аҙағында сығарылыш класс уҡыусылары өсөн Берҙәм дәүләт һәм Дөйөм дәүләт имтихандары башлана. Республиканың фән һәм мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин әйтеүенсә, быйыл БДИ-ны 16844 кеше тапшырасаҡ. Уларҙы үткәреү өсөн 164 пункт әҙерләнгән. Ә 9-сы кластарҙа Дөйөм дәүләт имтиханын 434 пунктта 51812 кеше тапшыра. 11-се класты тамамлаусылар 3 йәки 4 июлдә бер предмет буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан бирә ала. Аттестат тапшырыу тантаналы шарттарҙа 27 һәм 28 июндә үтә.

✓Башҡортостанда быйыл ике федераль трасса участкаһы ремонтлана. "Урал буйы" Федераль юл идаралығы етәксеһе Денис Абрамов хәбәр итеүенсә, дөйөм оҙонлоғо 118 саҡрым юлдарҙа асфальт яңыртыла. "Урал" М-5 (Мәскәү - Рязань - Пенза - Һамар - Өфө - Силәбе) трассаһында - 62,2 км, Өфө - Ырымбур юлында - 13 км участка һәм дөйөм оҙонлоғо 42,8 км булған "Восток" М-12 магистраленә сығыу араһы төҙөкләндерелә.

✓Башҡортостан халҡы йәйгеһен Кубань курорттарында ял итеүгә өҫтөнлөк бирә. Туту.ру мәғлүмәттәре буйынса, республикала йәйгә Краснодар крайына самолеттарға һәм поездарға билеттарҙың 50 проценты һатылған. Санкт-Петербург һәм Дағстанға - 7 процент, Мәскәүгә 6 процент тура килә. Йәйге сәйәхәт өсөн һатып алынған билеттарҙың 5 проценты - Ханты-Манси округына, 3 проценты - Ямал һәм Һамар өлкәһенә, 2 проценты - Ставрополь крайына, 1 проценты Ростов өлкәһенә тура килә. Сит ил йүнәлештәренән иһә Башҡортостан халҡы Белоруссияны һәм Үзбәкстанды һайлай.

✓23 майҙа Өфөлә Башҡортостан студент отрядтарының өсөнсө хеҙмәт семестры асыла. 8 меңдән ашыу кеше төҙөлөш, педагогия, ауыл хужалығы, сәнәғәт производствоһы, медицина һәм сервис йүнәлештәре буйынса объекттарға юллана. Бөгөнгө көндә студент отрядтарының төбәк штабы 120 отрядты үҙ эсенә ала.

✓Белорет үҙәк район дауаханаһында айыуҙан зыян күргән 70 йәшлек ир вафат булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, фажиғәле хәл 4 майҙа Әбйәлил районының Шәрип ауылы янында теркәлгән. Урманда ҡайын ороһо йыйып йөрөгән 70 йәшлек иргә айыу ташланған. Белорет табиптары ике аҙна буйына пациенттың ғүмере өсөн көрәшкән. Улар бер нисә ҡатмарлы операция яһаған, береһе алты сәғәт дауам иткән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ирҙе ҡотҡара алмағандар.

✓Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы 2025 йылдың II кварталына бер квадрат метр торлаҡтың яңы уртаса баҙар хаҡын раҫланы. Билдәле булыуынса, бер "квадрат" 113 532 һум тора. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2025 йылдың I кварталында был сумма 110 658 һум ине. Күрһәткес торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға федераль субсидияларҙы иҫәпләү өсөн ҡулланыла. Был аҡсаны торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн ҡулланырға мөмкин.

✓ *"Әгәр кеше һуғышта зыян күргән икән, беҙ уны реабилитациялау өсөн шарттар булдырырға, шул иҫәптән дәүләт иҫәбенә автомобиль кеүек техник реабилитация саралары менән тәьмин итергә тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.*



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ИДАРАСЫЛАР КИЛӘ

**"Башҡортостан геройҙары" программаһының киләһе этабына 150-гә яҡын кеше үтте. Улар онлайн-әңгәмәләшеүҙә ҡатнашты.** Артабанғы этап Өфөлә Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең вуз-ара кампусы майҙансығында 21 майҙа ойошторолдо. Баһалау саралары йомғаҡтары буйынса 70 финалсы билдәләнде. Улар ҡабаттан квалификация үтеү мөмкинлегенә эйә була, һәр ҡатнашыусыға остаз беркетелә. "Башҡортостан геройҙары" программаһының ойоштороу комитетында белдереүҙәренсә, һайлап алыу турын үткәндәрҙең 95 проценты - республикабыҙҙан. Ҡатнашыусыларҙың уртаса йәше - 41, улар араһында өс ҡатын-ҡыҙ бар. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иғлан иткән "Башҡортостан геройҙары" республика программаһы 2025 йылдың 24 февралендә башланды. Ул Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса тормошҡа ашырылған "Геройҙар ваҡыты" федераль проектының дауамы булып тора. Маҡсат - МХО-ла ҡатнашыусылар араһынан идарасыларҙың яңы быуынын әҙерләү.

✓ **Башҡортостанда башҡорт телен өйрәнгән уҡыусыларҙың артыуы күҙәтелә. Был хаҡта республиканың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә белдерҙе.** Уның һүҙҙәренсә, быйылғы уҡыу йылында 409 меңдән ашыу уҡыусы башҡорт телен республиканың дәүләт теле булараҡ өйрәнә. Башҡорт теле уҡытыусыларының беренсе Бөтә Рәсәй съезы ойошторолған 2019 йыл менән сағыштырғанда, башҡорт телен өйрәнергә теләк белдергән балалар 67 проценттан алып 79 процентҡа тиклем артҡан. "Шулай уҡ беҙ полилингваль гимназиялар селтәрен булдырыуҙы дауам итәбеҙ, әле улар 9. Быйыл тағы ла өс мәктәп асырға йыйынабыҙ", - тип өҫтәне министр. Илдар Мәүлитбирҙин һүҙҙәренсә, Өфөлә башҡорт теле уҡытыусыларының икенсе Бөтә Рәсәй съезы сараларында йәмғеһе 750-нән ашыу кеше ҡатнашҡан, уларҙың 550-гә яҡыны республика ҡалаларынан һәм райондарынан, шулай уҡ Рәсәй төбәктәренән делегат булып килгән.

✓ **Башҡортостанда йәш ғалимдарға ярҙам күрһәтеү өсөн 2022 йылдан алып республика бюджетынан 200 миллион һум йүнәлтелә.** Был аҡсаға 133 йәш ғалим торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан һәм 500-ҙән ашыуы Рәсәйҙең, шулай уҡ сит илдәрҙең иң яҡшы юғары уҡыу йорттарында ғилми стажировка үткән. Радий Хәбиров Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусының Геном үҙәгендә йәш ғалимдар менән ойошторолған осрашыуҙа ошо турала һөйләне. Ике йылға бер тапҡыр республикала фән һәм техника өлкәһендә өс республика дәүләт йәштәр премияһы тапшырыла. Уларҙың күләме - 500 мең һум. Быйыл Башҡортостан Башлығы тәбиғи, техник һәм гуманитар фәндәр өлкәһендә "Йылдың йәш ғалимы" премияһын булдырҙы. Был республикала фәнгә һәм йәш ғалимдарға ярҙам итеү өсөн йәнә бер бер мөһим аҙым.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӘРӘКЛЕ БҮЛӘК

**Үткән аҙнала Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ватан көсө" IV республика форумының пленар ултырышында ҡатнашты. Унда төбәк етәксеһе башланғысы менән 2021 йылда башланған "Атайсал" проектын тормошҡа ашырыу барышы тикшерелде.**

Ултырыш башланыр алдынан республика Башлығы хәрби хәрәкәттәр ветераны, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Азамат Әйүповҡа ҡул менән идара ителгән автомобиль асҡысын тапшырҙы. 2022 йылда ул үҙ теләге менән Ватанды яҡлаусылар сафына баҫа, ауыр яралана. Батырлығы, батальондың шәхси составын ҡотҡарыу буйынса эвакуацияла ярҙам иткәне, дошмандың хәрби техникаһын юҡ иткәне өсөн Батырлыҡ ордены һәм генерал Шаймуратов миҙалы менән бүләкләнә.

Азамат Әйүпов республика Башлығына Ватанды һаҡлаусыларға шәхси иғтибар һәм ярҙам күрһәткәне өсөн рәхмәт белдерҙе. Ул спорт менән шөғөлләнеүен, следж-хоккей буйынса йыйылма командаға, фермерҙар мәктәбенә уҡырға инеүен һөйләне.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путин статс-секретарь - Рәсәй Федерацияһы Оборона министры урынбаҫары, "Ватанды һаҡлаусылар" Махсус хәрби операцияһында ҡатнашыусыларға ярҙам итеү дәүләт фонды рәйесе Анна Цивилеваның ауыр йәрәхәт алған Махсус операция ветерандарын техник реабилитация сараһы сифатында ҡул менән идара ителгән автомобилдәр менән тәьмин итеү буйынса башланғысын хупланы. Был категорияға аяҡтарын парлы ампутациялаған МХО ветерандары ҡарай.

Төбәк етәксеһе шулай уҡ "Ватанды һаҡлаусылар" фондының социаль координаторҙары һәм МХО ветерандары менән аралашты, медицина реабилитацияһы һәм социаль адаптация мәсьәләләрен тикшерҙе. "Әгәр кеше һуғышта зыян күргән икән, беҙ уны реабилитациялау өсөн шарттар булдырырға, шул иҫәптән дәүләт иҫәбенә автомобиль кеүек техник реабилитация саралары менән тәьмин итергә тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров журналистар менән аралашҡанда.

# ГАЗҺЫҘ ДОНЪЯ - ҺАҢҺЫҘ

**Өфөлә Рәсәй нефть-газ химияһы форумы һәм 33-сө "Газ. Нефть. Технологиялар - 2025" халыҡ-ара күргәҙмәһе барышында Рәсәйҙең энергетика министры Сергей Цивилев һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы производстволар асыуға старт бирҙе.**

"Башнефть" компанияһы Краснокама районында "Мирная" һанлы подстанцияһын сафҡа индерҙе. Подстанция 470-тән ашыу сығарыу скважинаһын һәм биш етештереү майҙансығын: нефть паркын, ҡатлам баҫымын һаҡлау һәм беренсел нефть таҙартыу буйынса объекттарҙы электр менән тәьмин итергә тейеш. Бөтә процестар автоматик рәүештә бара. Был эксплуатация сығымдарын 40 процентҡа ашыуға кәметергә мөмкинлек бирә. "Башнефть" компанияһының генераль директоры урынбаҫары Виктор Соловых һүҙҙәренсә, подстанцияны реконструкциялағанда Рәсәйҙә етештерелгән заманса материалдар һәм юғары технологиялы ҡорамалдар файҙаланылған.

Благовещенда "Нефтехим тәжрибә заводы" йәмғиәтенең айырым бүлексәһендә нефть сығарыу һәм ташыу процестары өсөн коррозия ингибиторҙарын алыу ҡулайламаһы эшләй башланы. Бында нефть транспортын сығарыу өсөн реагенттар етештерелә. Шулай уҡ Өфө районының Шмидт ауылында, Салауат районының Тирмән, Иҙрис, Юлай ауылдарында газ үткәреү программаһы сиктәрендә дүрт газ бүлеү торбаһы сафҡа индерелде.

# БАҠЫР СЫҒАРЫРҘАРМЫ?

**"Салауат" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең Волга буйы федераль округы буйынса ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу департаментынан алған лицензияһына ярашлы, баҡыр запастары булған Әбйәлил районында геология-разведка эштәре 2025 йылда башҡарылырға тейеш. Был хаҡта "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында компания директоры Таһир Бәхтегәрәев һөйләне.**

Лицензия участкаһының майҙаны - 229 гектар, бында яҡынса 1 миллион тонна баҡыр булыуы ихтимал. Тикшереү сәнәғәт ҡиммәтен һәм артабан эшкәртеүҙең иҡтисади маҡсатҡа ярашлылығын билдәләү өсөн кәрәк. Таһир Бәхтегәрәев шулай уҡ разведка эшен нисек үткәрергә планлаштырыуҙарын аңлатты. Участкала бер нисә скважина быраулана, ә материал өлгөләрен лабораторияға ебәрәләр. "Был баҡыр запастарын асыҡлау өсөн кәрәк. Бынан һуң техник-иҡтисади нигеҙләү формалаштырыла, уны дәүләт комиссияһы ҡарай, ә баҡыр запастары дәүләт балансына ҡуйыла. Шунан һуң тау-байыҡтырыу комбинатын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә", - тине "Салауат" йәмғиәте директоры.

Әйтеүҙәренсә, производство өсөн участка ауылдарҙан һәм тәбиғәт объекттарынан байтаҡ алыҫта урынлашҡан. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, тау-байыҡтырыу комбинатын төҙөү проекты дәүләт экспертизаһының ыңғай һығымтаһын алырға тейеш, уның буйынса асыҡ тыңлауҙар ойоштороласаҡ. Компания тәҡдим иткән мәғдән сығарыу һәм байытыу технологияһы экологик яҡтан таҙа булыуы менән айырылып тора.

**Роман ЯКИМЧУК.**

# АУЫЛҒА - ТЕХНИКА!

**Башҡортостан аграрийҙары 2025 йылдың дүрт айында 4 миллиард һумдан ашыу суммаға 616 берәмек ауыл хужалығы техникаһы һәм ҡорамалдары һатып алған.**

"Был уҙған йылдың ғинуар-апрель айҙарына ҡарағанда 1,1 миллиард һумға күберәк", тип билдәләне Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Быйыл йыл башынан 116 трактор, 12 иген йыйыу комбайны, шулай уҡ 170-тән ашыу тупраҡ эшкәртеү һәм сәсеү машинаһы, башҡа техника һатып алынған. Стәрлетамаҡ, Ҡырмыҫҡалы һәм Илеш райондары аграрийҙары башҡаларға ҡарағанда йышыраҡ ауыл хужалығы техникаһы һәм ҡорамалдары һатып алған (416-457 миллион һумға). Иң аҙ техника алған райондар иҫәбендә - Аскын, Мишкә, Мәсетле. Архангел, Бөрө һәм Бөрйән райондары аграрийҙары иһә йыл башынан бөтөнләй техника һатып алмаған.

-"Росагролизинг" акционерҙар йәмғиәте аша ғинуар-апрель айҙарында 953 миллион һумға 189 берәмек техника килгән. Өҫтәмә рәүештә 1 миллиард һумға ғаризалар бирелгән. "Росагролизинг"тың "Оттепель" махсус акцияһы март айында башланды һәм ағымдағы йылдың 31 майына тиклем оҙайтылды. Республикабыҙ аграрийҙарына был программаға әүҙем ҡушылырға кәрәк", - тип белдерҙе Илшат Фәзрахманов.

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙә хәрби хәрәкәттәр ветерандарына айлыҡ түләү күләмен арттырырға йыйыналар. Был хаҡта ТАСС илдә кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил Татьяна Москальковаға һылтанып хәбәр итә. "Хәрби хәрәкәттәр ветерандарына айлыҡ түләү бик аҙ, уларҙың дәүләт именлеген тәьмин итеүгә индергән өлөшөнә тиң түгел һәм арттырырға мохтаж", - тип омбудсмендың һүҙҙәрен килтерә баҫма. Хәҙер түләүҙең күләме - 4,5 мең һум.

✓Июнь айында тәүге ике аҙна ҡыҫҡа була. Быйыл Ҡорбан байрамы 6 июнгә тура килә. 5 июндә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Кесе йома, 12 июндә, Рәсәй көнө билдәләнә, ә 8 марттағы ял 13 июнгә күсерелде. Шаршамбыла эш ваҡыты бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓Башҡортостандан Тимур Хәмәтшин Венгрияла коляскала фехтование буйынса Донъя кубогы этабында көмөш призер булды. Республиканың спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ярыштар Эгер ҡалаһында үтте. Турнир йомғаҡтары буйынса республикабыҙ спортсыһы шәп һөҙөмтә күрһәтте: төркөмдәр турында бер тапҡыр ҙа еңелмәне һәм уның йомғаҡтары буйынса рейтингта алдынғы позицияны биләне.

✓Башҡортостанда алдағы ике йылда Өфө - Ырымбур трассаһының Стәрлетамаҡты урап үткән участкаһында (Стәрлетамаҡтан Стәрлебаш боролошона тиклем) капиталь ремонт эштәре башҡарыла. "Урал буйы" юл идаралығы етәксеһе Денис Абрамов хәбәр итеүенсә, реконструкциянан һуң ике һыҙатлы юл дүрт һыҙатлы итеп үҙгәртелә. Төҙөлөш-монтаж эштәренә контракт-ты "Дортрансстрой" йәмғиәте алған.

✓Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районында Олокүл - Ҡабаҡ - Һыуыҡ Шишмә юлының яҡынса 6,7 километрын төҙөкләндерергә йыйыналар. Был турала Башҡортостандың Юл хужалығы идаралығына һылтанма менән Республикаға идара итеү үҙәгендә белдерҙеләр. Подрядсы Ҡабаҡ ауылынан 3 км алыҫлыҡта Ольхово яғына һалҡын ресайклинг ысулы менән асфальтбетон түшәгән.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр Төркиәгә йышыраҡ осорға мөмкин. Республиканың Транспорт министрлығы хәбәр итеүенсә, хәҙер Өфөнән Истанбулға тура рейстар күберәк. 1 июндән Utair авиакомпанияһының Өфө - Истанбул маршруты буйынса тура рейстары башлана. Рейстар аҙнаһына бер тапҡыр - йәкшәмбе башҡарыла. Өфөнән самолет көндәҙгө 1-се 30 минутта, ә Истанбулдан киске 5-се 25 минутта оса. Юлға 4 сәғәт 55 минут ваҡыт китә. Рейстар 186 урынға иҫәпләнгән Boeing 737-800 самолеттарында башҡарыла. Әлеге ваҡытта Red Wings авиакомпанияһы ла Истанбулға тура рейстар башҡара. Шулай итеп, Өфөнән Истанбулға осоштар аҙнаһына өс тапҡыр ойоштороласаҡ.

**✓ Паркка терәлеп ултырған беҙҙең театрҙы ғына алғанда ла, 400-ҙән ашыу кеше эшләгән коллектив өсөн бөтөнләй транспорт ҡуйыу мөмкинлеге юҡ. Спектаклгә килгән 500 тамашасы хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.**



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЛЕНИН ПАРКЫНДА...

## ҡурайға һәйкәл булырға тейеш!



**Төҙөкләндереү эштәре башланыу сәбәпле, 12 майҙа Өфөнөң Ленин исемендәге паркы инеп ял итеү өсөн ябылды. Раҫланған проект буйынса ул тулыһынса яңыртыла. Быйыл ағастарҙы бер формаға килтереү, күп йыллыҡ ҡыуаҡтар ултыртыу, коммуникацияларҙы алмаштырыу, юлдарҙы төҙөкләндереү ҡаралған. Планлаштырылған эштәрҙе тамамлау һәм яңыртылған ял итеү урынын ҡайтанан асыу иһә 2026 йылдың 11 октябренә билдәләнгән.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса паркты реконструкциялауға бәйле ваҡытлыса йәмәғәт контроле төркөмө булдырылды. 13 майҙа уның тәүге ултырышы үтте. Йәмәғәт күҙәтеүселәре паркты ҡараны, башҡарыласаҡ эштәр күләмен баһаланы, подрядсы компания вәкилдәре менән аралашты. Ошо йәһәттән йәмәғәт контроле төркөмө ағзаһы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артис Хөрмәтулла Үтәшев фекерҙәре менән уртаҡлашты:

- Йәмәғәт контроле төркөмөнөң маҡсаты - реконструкция үткәргәндә ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен, парктың тарихи йөҙөн, уның биләмәһендәге һәйкәлдәрҙе, истәлекле урындарҙы һаҡлауҙы контролдә тотоу. Мәҫәлән, Мәжит Ғафуриҙың ҡәбере лә ошонда бит. Үткән тәүге ултырышта был турала ентекле һөйләшеү булды. Шулай уҡ транспорт ҡуйыу урындары, ял итеүселәргә уңайлы шарттар тыуҙырыу тураһында ла фекер алыштыҡ. Паркка терәлеп ултырған беҙҙең театрҙы ғына алғанда ла, 400-ҙән ашыу кеше эшләгән коллектив өсөн бөтөнләй транспорт ҡуйыу мөмкинлеге юҡ. Спектаклгә килгән 500 тамашасы хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Паркта балалар өсөн уйын майҙансығы эшләү хаҡында ла һүҙҙәр булды. Әйткәндәй, ул беҙҙең драма театрына йәнәш урында ҡоролосаҡ.

Бынан өс йыл элек ҡала хакимиәте Ленин исемендәге ял паркын капиталь төҙөкләндереү буйынса фекер алышыу уҙғарғайны. Унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы вәкилдәре лә ҡатнашты. Беҙ осрашыу барышында паркта ҡурайға һәйкәл ҡуйыу, милли ерлекте, рухты сағылдырған элементтар менән биҙәү мәсьәләһен күтәреп сыҡтыҡ. Сөнки Ленин паркы баш ҡалабыҙҙың тарихи үҙәгендә, Башҡортостандың идара власы ултырған урында урынлашҡан һәм, башҡа төбәктәрҙәге кеүек, ул беҙҙең ерлектең, халҡыбыҙҙың мәҙәни мөхитен сағылдырырға тейеш. Тәҡдим ителгән проектта уларҙың булмауы ныҡ ғәжәпләндерҙе. 2014 йылда уҡ Мәҙәниәт министрлығы Ленин паркына ҡуйыласаҡ ҡурай һәйкәле композицияһының иң яҡшы эскизына конкурс иғлан иткәйне. Әлеге ултырышта мин был мәсьәләне тағы ла күтәрҙем, паркта милли һыҙат булырға тейеш, тип үҙ фекеремде әйттем. Тик аныҡ ҡына яуап булманы. "Мәҙәни мираҫ объекты булып торған, XIX быуатта нигеҙ һалынып, совет осоро элементтары менән тулыландырылған классик стилдәге парк был, проектта һүҙ уны яңыса ҡороу тураһында түгел, ә уны нисек бар, шулай һаҡлап, булған объекттарға реконструкция үткәреү тураһында ғына бара, бөтә экспертизалар ҙа үткәрелгән", - тип һылтаныу таптылар. Шулай ҙа өмөттө өҙмәйбеҙ, ҡурайға һәйкәл ҡуйылыр, тип ышанабыҙ.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН яҙып алды.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ИҢ ШӘП ГОСПИТАЛЬ!

**Республика һуғыш ветерандары госпитале Рәсәйҙә медицина реабилитацияһын ойоштороу буйынса иң яҡшыһы тип танылды. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.** Конкурсҡа йомғаҡ яһағанда төрлө критерийҙар (ҡоралдар менән йыһазландырыуҙан алып пациенттарҙың фекерҙәренә тиклем) иҫәпкә алынды, тип билдәләне ул. Табиптарға наградаларҙы илдең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко тапшырҙы. Госпиталдә башлыса республиканың оло быуын вәкилдәре, ә 2022 йылдан МХО-ла ҡатнашыусылар дауалана. Бында улар юғары технологиялы, комплекслы медицина, шулай уҡ психологик реабилитация үтергә мөмкин. "Был иһә беҙҙең өсөн әһәмиәтле еңеү, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - МХО башланғандан алып госпиталдә йәмғеһе 5 меңдән ашыу яугир дауаланған. Уларҙың күбеһе хәрби хеҙмәтен дауам итеү өсөн йәнә фронтҡа юлланды. Был, әлбиттә, ошонда күрһәтелгән ярҙам сифатының төп күрһәткесе".

✓ **Быйыл Өфөлә математика лицейын төҙөй башлау планлаштырыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия ғилми-белем биреү үҙәге вуз-ара студенттар кампусының Геном үҙәгендә барған йәш ғалимдар менән осрашыуҙа ошо турала белдерҙе. Лицей йыл ярымда төҙөлөп бөтөргә тейеш.** Хәбәр ителеүенсә, математика лицейы 360 уҡыусыға һәм 250 йоҡо урынына иҫәпләнгән. Объекттың дөйөм майҙаны - 22,3 мең квадрат метрҙан ашыуыраҡ. Белем биреү учреждениеһы "Йәштәр һәм балалар" милли проекты сиктәрендә төҙөлә. Белем усағының биләмәһе "Өфө Экспо" күргәҙмә комплексы һәм Өлфәт Мостафин исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге араһында урынлашҡан. Белем биреү объекты ике ҡаттан алты ҡатҡа тиклемге дүрт блоктан тора. Унда спорт зонаһы, ашхана, конференциялар залы, китапхана, уҡытыусылар бүлмәһе һәм административ биналар була. Шулай уҡ проектҡа биш ҡатлы уҡыу корпусы, уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн торлаҡ блогы инә. Математика лицейы төҙөлөшө хаҡы 2,8 миллиард һумға баһалана.

✓ **Өфөлә түләүле парковканы ҡулланыу өсөн аҡса түләмәүселәргә штраф индерелә.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекска үҙгәрештәр индерергә йыйына. Парламент рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, июндә Өфө үҙәгендә түләүле парковка системаһы эшләй башлай һәм водителдәргә түләүҙән ҡасҡан осраҡта 1500 һумлыҡ штраф ҡараласаҡ. Өфөлә дөйөм ҡулланыу юлдарында муниципаль түләүле парковкаларҙың адреслы исемлеге раҫланды. Тейешле ҡарарға ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ҡул ҡуйҙы. Тәүге этапта 1188 парковка урыны булдырыла, уларҙың кәм тигәндә 10 проценты мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн тәғәйенләнә. Парковканың бер сәғәте 40 һум торасаҡ. Июндә түләүле парковкаларҙың барыһы ла эшләй башлауы күҙаллана.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# КОНСУЛЛЫҠ - ӨФӨЛӘ!



**Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин Өфөлә Белоруссияның генераль консуллығын ойоштороуҙы хупланы.**

Консуллыҡ округына Башҡортостан, Ҡалмыҡстан, Удмуртия, Әстерхан, Ырымбур һәм Һамар өлкәләре инә. Михаил Мишустин ҡул ҡуйған бойороҡта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә "Өфөлә Белоруссияның генераль консуллығы өсөн ҡуртым йәки һатып алыу шарттарында хеҙмәт һәм торлаҡ биналарын бүлергә, кәрәк булған осраҡта, уларҙы Рәсәй ҡануниәтенә ярашлы төҙөү өсөн ер участкаларын бирергә, шулай уҡ башҡа ойоштороу мәсьәләләрен хәл итергә" тәҡдим ителде. Хөкүмәт рәйесе Рәсәйҙең сит ил эштәре министрлығына Белоруссия яғы менән тейешле килешеү төҙөргә ҡушты. Әлеге көндә Өфөлә Белоруссияның Рәсәйҙәге илселегенең бүлексәһе эшләй. Уның яуаплылыҡ зонаһында шул уҡ төбәктәр: Башҡортостан, Ырымбур, Һамар, Әстерхан өлкәләре, Удмуртия һәм Ҡалмыҡстан. Бынан алдараҡ республика Башлығы Радий Хәбиров Белоруссияның Башҡортостандың мөһим партнерҙарының береһе булыуын билдәләгәйне.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә МХО-ла һәләк булған Ильяс Ишбаев хөрмәтенә мемориаль тактаташ асылды. Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов хәбәр итеүенсә, яугирҙың исеме үҙе уҡыған 2-се Башҡорт лицейында мәңгеләштерелде. Ильяс Ишбаев фронтта пулеметсы булып хеҙмәт иткән. Батырлыҡ ордены, "Хәрби ҡаҙаныштары өсөн" миҙалы һәм "Запорожье өлкәһе алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән. Бер алышта яҡташыбыҙ ҡаты яраланған. Ул рация аша ярҙамға саҡырған һәм яуҙаштары уны хәүефһеҙ урынға алып сыҡҡан. Ҡыҙғаныска ҡаршы, яугир алған яраларынан вафат булған. "Яугир булыу, тимәк, мәңге йәшәү", - тип яҙа Олег Котов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте хеҙмәткәре контракт төҙөп, МХО-ға юлланған. Ике йылдан ашыу ведомствола эшләгән осорҙа үҙен яҡшы белгес итеп күрһәткән. Уның ҡарары коллегалары өсөн көтөлмәгән хәл булды, тип билдәләне район башлығы Рөстәм Хәмитов. "Илебеҙ өсөн ҡатмарлы осорҙа Дмитрий Ватан һағына баҫыуҙы үҙенең бурысы тип һанай. Уның был аҙымы хөрмәт һәм һоҡланыу уята. Димаға хеҙмәтендә уңыштар!" - тип яҙа ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфө спортсыһы Полина Хәйертдинова фехтование буйынса Рәсәй йәштәр беренселегендә еңеү яуланы. Ҡыуаныслы яңылыҡты республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Тула ҡалаһында 24 йәшкә тиклемге егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында фехтование буйынса Рәсәй беренселеге уҙҙы. Финалда Полина Хәйертдинова Мәскәүҙән килгән дәғүәсеһен 15:6 иҫәбе менән еңеп, еңеүсе исеменә лайыҡ булды.

✓ Өфөнөң Аксаков исемендәге баҡсаһында "Халыҡ һаулығы көндәре" байрамы уҙғарылды. Был сараны Республика кардиология үҙәге командаһы ойоштороҙо. Тематик аллеяла һәр кем үҙенең ҡан баҫымын үлсәтә, ә махсус зонала сәләмәт туҡланыу принциптары тураһында белә алды. Һаулыҡ үҙәктәрендә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә диагностика һәм анкета үтергә мөмкин ине.

✓Өфөнөң Рафаэль Ғәлимов ВТФ тхэквондо буйынса Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды. Рафаэль 53 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында алтын миҙал яуланы. Ул Искәндәр Рәхмәтов етәкселегендә Өфөнөң "Искра" тхэквондо клубында шөғөлләнә. Ә Артем Звягинцев 45 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында бронза миҙал алды (тренеры - Александр Козьмин). Тхэквондо буйынса Рәсәй беренселеге Мәскәү өлкәһенең Люберцы ҡалаһында үтте. Турнирҙа илдең 60 төбәгенән 788 спортсы ҡатнашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ҙур әберсен
### (Большая горлица)



Ҡыр күгәрсененә оҡшаған, тик кәүҙәгә саҡ ҡына ҙурыраҡ. Түҙә ҡыҙғылт, боғағы - ерән ҡыҙыл, ҡойроғонда башҡа күгәрсендәрҙеке кеүек аҡ һыҙаты юҡ.

Көньяҡ Урал урмандарынан һәм урманлы далаларынан алып Курил утрауҙарына тиклем таралған. С. Снигиревский мәғлүмәттәрендә ҙур әберсен Мейәс тирәһендә, Һаҡмарҙың түбәнге ағымында йәшәй тип күрһәтелгән. Һәр хәлдә, ҙур әберсенде Мейәс, Уй, Яйыҡ йылғалары буйында күрергә мөмкин. Ырымбур өлкәһендә оя ҡора.

### Ҡала әберсене
### (Кольчатая горлица)



Ҡыр күгәрсене ҙурлығында. Арҡаһы, ҡанатының өҫкө өлөшө алһыу-көлһыу төҫтә, буй-буй һыҙаттары юҡ. Ҡойроғо - оҙон һәм киң. Ҡойроғондағы аҡ һыҙаты ла киң. Ата ҡала әберсененең тауышы тоноҡ, "хух-хуу-ху" тип ишетелә, ҡайһы саҡта ул көлөүгә лә оҡшап китә. Ҡайһы саҡта осоп барғанда кисҡен генә тауыш сағара, был башҡа күгәрсендәргә хас түгел.

Элек Урта диңгеҙ ареалында йәшәгән был ҡош XX быуатта үҙенең тәү йәшәгән урынын алыштыра, хәҙер ҡала әберсене Башҡортостанда, Ырымбур өлкәһендә, Силәбе өлкәһенең көньяғында ла оя ҡороп йәшәүсе ҡоштар иҫәбендә. Был хәл 1990 йылдар башында уҡ теркәлгән. Беҙҙең ҡала әберсене менән тәүге "танышыуыбыҙ" 1984 йылдың июнендә булды - Туҡай урамындағы йүкә аллеяһында бер пар ҡала әберсене оя ҡороу өсөн сыбыҡ-сабыҡ йыя ине: ат ҡош әберсене ваҡыты-ваҡыты менән һайрап ебәрә. Ояһын тапманыҡ, ҡоштар сыбыҡтарҙы ҡайҙалыр йорттар араһына алып оса ине. Биолог В. Едренкин 2003-2004 йылдарҙа оя ҡорған бер пар ҡошто Кушнарен районы Ҡамышлы ауылында күҙәткән. Ҡоштар йорт ихатаһына килеп, тауыҡтар, өйрәктәр менән бергә ашап йөрөй. Оялары ауылдан 300 метр алыҫлыҡта, Ҡамышлы йылғаһы ярындағы усаҡта табыла. Һуңғы йылдарҙа ҡала әберсене Өфөнән көньяғыраҡ күсте.

Беҙҙең республикала ҡала әберсененең йәшәү урыны - ағас үҫентеләренә бай булған ҡала һәм ауылдар. Ҡала күгәрсенән айырмалы рәүештә, кәрниз һәм йорт ҡыыҡтарында түгел, ә ағастарҙа, бағаналарҙа, сымдарҙа, антенналарҙа ултырырға ярата. Оялары ла асыҡ урында. Уны башлыса инә ҡош төҙөй, ата ҡош материал ташып тора. 2 йомортҡа һала. Күберәк инә ҡош баҫа, ата ҡош ҡайһы саҡта уны алыштырып тора. 14-19 көндән бәпкәләр сыға, улар 20 көнлөк сағында оса башлай.

Төрлө орлоҡтар менән, шулай уҡ вакланган икмәк, бутҡа һ.б менән туклана.

Европа һәм Азияның көньяғында ҡышлай. Ырымбурҙа ҡышлауға ҡалырға мөмкин.

Хәҙер республикала быҡаса башлыса Көнсығыш Ҡазағстанды баҫып алған ваҡ ҡала әберсене лә күплап күренә башланы.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ ИДЕЯҒА ӘЙЛӘНҺЕН...

## "Айыҡ ауыл" тигән сәләмәтлек, иман, именлек бәйгеһе

**Өфөнөң "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Айыҡ ауыл" республика конкурсы әүҙемселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Айыҡ ауыл" конкурсы беренсе тапҡыр 2011 йылда уҙғарылды. 2020 йылдан республика етәксеһе Радий Хәбировтың башланғысы менән проект Башҡортостан Башлығы гранттары фондынан ярҙам алды. Конкурстың төп маҡсаттары - сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, халыҡты йәмәғәт эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу, изге эштәргә дәртләндереү. Башҡортостан Башлығы указы менән уҙған йылдан конкурстың приз фонды 48,4 миллион һумға тиклем арттырылды. Еңеүселәр 1,5-6 миллион һумлыҡ премия менән бүләкләнә.**

Башҡортостанда "Айыҡ ауыл" конкурсы милли идеяға әүерелеүе ихтимал. Республика Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең был аҙналағы оператив кәңәшмәһендә ошо турала белдерҙе. "Республикабыҙ ауылдарының өстән бер өлөшө ошо проектта ҡатнаша. Киләһе йылда ла уны дауам итеүегеҙҙе һорайым. Конкурсты милли идея тип ҡарарға кәрәк. Сараның сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауҙа әһәмиәте ҙур", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Был юлы "Айыҡ ауыл" республика конкурсы финалсыларын Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова, Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов сәләмләне. "Айыҡ ауыл" республика конкурсы алтынсы тапҡыр ойоштоторола", тип билдәләне Эльвира Айытҡолова. Уның һүҙҙәренсә, финал этабында ҡатнашыусыларҙың барыһына ла 200-әр мең һум премия бирелә, шулай уҡ республикабыҙҙың иң яҡшы 12 ауылы еңеүсе тип иғлан ителә. Шулай уҡ бәйгелә ҡатнашыусылар ойоштороусыларҙан махсус бүләктәр - республика шифаханаларына юлламалар, Рәсәй Дәүләт Думаһынан, республика министрлыҡтарынан һәм ведомстволарынан Рәхмәт хаттары алды.

Вице-премьер Руслан Хәбибов билдәләүенсә, был бәйгелә тормошон ыңғай яҡҡа үҙгәртергә ынтылған ауылдар ҡатнаша. "Илебеҙ Президенты Владимир Путин алдыбыҙға анһыҡ бурыстар ҡуйҙы. Иң тәүҙә республика граждандарының әүҙем йәшәү рәүеше өсөн шарттар булдырыу зарур. Физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеүселәр йылдан-йыл арта. Был муниципалитет, ауыл биләмәләре башлыҡтарының эш һөҙөмтәһе булып тора. Ауылдарыбыҙҙы үҫтереүҙең төп йүнәлештәрен республика етәксеһе Радий Хәбиров билдәләй. Шәхси миҫал - мөһим аспект. Беҙ нимә һәм нисек эшләргә кәрәклеген күрһәтергә тейешбеҙ. Еңеүселәр - тормошто яҡшы яҡҡа үҙгәртеүселәр. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тибеҙ. Быны балаларға аңлатыу мөһим. Балаларыбыҙ беҙҙән өлгө алырға тейеш", - тип билдәләне Руслан Хәбибов.

Шулай итеп, республиканың 12 айыҡ ауылы иғлан ителде. Бына улар:

"Эре тораҡ пункттар" номинацияһында Балаҡатай районының Биләш ауылы беренсе урынды алды, икенсе урынға - Ауырғазы районының Исмәғил ауылы, өсөнсө урынға Ҡариҙел районының Абыҙ ауылы лайыҡ булды.

"Ҙур тораҡ пункттар" номинацияһында Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылы еңеү яулаы. Икенсе урында - Күгәрсен районының Тәүәкән ауылы, өсөнсәлә - Бөрйән районының Ырғыҙлы ауылы.

"Урта тораҡ пункттар" номинацияһында Асҡын районының Әмир ауылы беренсе урынға сыҡты. Икенсе урында - Благовар районының Яныш ауылы, өсөнсөлә - Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылы.

"Бәләкәй тораҡ пункттар" номинацияһында Ейәнсура районының Кинйәбулат ауылы еңеүсе тип иғлан ителде. Икенсе урынды Борай районының Алтайыу ауылы алды, өсөнсәлә - Туймазы районының Бәйрәкәтүбә ауылы.

"Айыҡ ауыл" конкурсы еңеүселәрен ҡотлау тантанаһында шулай уҡ республиканың Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев та ҡатнашты. Уның билдәләүенсә, "Айыҡ ауыл" - ул сәләмәт тормош биләмәһе, демографияны, социаль именлекте яҡшыртыу, ныҡлы ғаиләләр, бәхетле балалар. "Конкурстың приз фонды һәм проекттың популярлығы йылдан-йыл арта бара. Шул уҡ ваҡытта аҡсаның күпселек өлөшө конкурста еңгән ауылдарҙың биләмәләрен төҙөкләндереүгә йүнәлтелә. Шулай ҙа төп маҡсат - ватандаштарыбыҙҙың, яҡташтарыбыҙҙың һаулығы. Республикала ялған хәмер эсеп үлеү осраҡтары, енәйәтселек һәм социаль етемлек кимәле кәмей", - тип билдәләне Толкачев.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**"Айыҡ ауыл" конкурсында Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылы командаһы әүҙемлеге, дәрт-дарманы, хатта берҙәм форма кейеүе менән айырылып торҙо. Абруйлы конкурста Әбйәлил данын ете егет яҡланы.**

"Иң тәүҙән алдыбыҙға беренсе урын алырға тигән маҡсат ҡуйҙыҡ. Ауыл халҡы менән бергә йыйылыш үткәреп, инициатив төркөм төҙөнөк. Унда 7 егет йыйылды. Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан, тигәндәй, бөгөн беҙ - еңеүсе. Бөтәһе ике автобус булып килдек Өфөгә. Шулай уҡ "Илекле ҡыр" фольклор ансамбле һәм ауыл ҡатын-ҡыҙҙары әүҙем ярҙам итте, - тине Вадим Абдуллин. - "Айыҡ ауыл" конкурсы ауылыбыҙға яңы һулыш бирҙе. Эскелеккә ҡаршы саралар, спорт ярыштары әүҙемерәк үтә башланы, шул уҡ ваҡытта МХО-ла хеҙмәт иткән ауылдаштарыбыҙға ярҙам итергә лә өлгөрҙөк. Киләсәктә лә был йүнәлештә эште туктатмаясаҡбыҙ, сөнки, йәшерен-батырының юҡ, "йәшел йылан" тиҙ арала кире ҡалҡып сығырға мөмкин".

Ҡаҙмашта 500 самаһы кеше йәшәй. Ауыл уңған, эшһөйәр һәм татыу халҡы менән матур. Бында йәш ғаиләләр төҙөлә, матур төҙөк йорттар ҡалҡып сыға. Ҡаҙмаштар бөгөн дәррәү МХО-ға ярҙам итә, оҫта ир-уҙамандар алғы һыҙыҡҡа дүрт мунса, тиҫтәләгән гуманитар ылау ебәргән. Ә ундан ашыу егет уҙ теләге менән тыуған илен һаҡларға киткән.

"Әбйәлил районының Ҡаҙмаш ауылы - был еңеүгә лайыҡ. Ауылда конкурс барышында ойоштоторолған инициатив төркөмдәге ете егет әүҙем эшләй. Улар артынан бөтә халыҡ эйәрә. Егеттәр үҙ алдына ҙур маҡсат ҡуйҙы - конкурста еңгән аҡсаға экскаватор һатып алырға ниәт итте. Һис шикһеҙ, был бик дөрөҫ буласаҡ, ауыл ерендә техникаһыҙ булмай. Әйтергә кәрәк, Урал арьяғының бөтә ауылдары ла "Айыҡ ауыл" конкурсында әүҙем ҡатнаша. Минең уйлауымса, был уларҙың йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыуына, республикалағы мәсьәләләргә битараф булмауына бәйле", - тип белдерҙе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Хәлил Рәхмәтуллин.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

*✓ Яңы ғына хәрби министр итеп тәғәйенләнгән генерал-адъютант Милютин башҡорт ғәскәрен үҙгәртеп ҡороу хаҡында рәсми хат менән Безаҡҡа мөрәжәғәт итә, ул ғәскәрҙең әлеге хәлендә файҙаһыҙ булыуы хаҡында яҙа.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**А.П. Безак**

**(1860 - 1864 йылдарҙа губернатор булған)**

Катениндан һуң генерал-губернатор вазифаһына Александр Павлович Безак тәғәйенләнә. 1860 йылдың аҙағында, Ырымбурға килеү менән үк, үҙ өйөнөң залында хеҙмәткәрҙәрҙе ҡабул иткәнендә төбәк менән либераль башланғыстарҙа идара итәсәге хаҡында белдерә. Ул ошо юҫыҡта тейешле реформалар үткәреү кәрәклеге, Петербургтан белемле чиновниктар саҡырыласағы, вазифаларға тәғәйенләгән саҡта һәр бер кеше бар яҡтан да тикшереләсәген һуң ғына ҡуйыласағы хаҡында һөйләй, сөнки шулай булмағанда эшкә лә зыян килә, вазифа биләгән кешене алыштырған саҡта ул да уңайһыҙ хәлдә ҡаласаҡ.

Катенин ваҡытында барса мөһим саралар махсус комитеттарҙа тикшерелә, быға эштәрҙе яҡшы белгән кешеләр йәлеп ителә, шунан һуң уларҙың тәҡдимдәре генерал-губернатор үҙе етәкләгән махсус комитетҡа тапшырыла торғайны. Безак был комитетарҙы юҡ итте.

Безак үҙ тормошонда һәр эште алдан уҡ уйлап, иҫәпхисап менән генә башҡарған кешеләрҙән булды, ул артыҡ-бортоҡлоҡҡа юл ҡуймайны. Ул үҙе янындағы хеҙмәткәрҙәрҙән һәм юғары начальниктарҙан да ошоно талап итте; шуға күрә Ырымбурҙа шәхси тормош тарая бирҙе, бал һәм кисәләр уҙғарыу ҙа ҡыҫҡарҙы. Катенин ваҡытында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙең барыһы ла тейәрлек китеп бөттө: Столыпин Уральскийҙан китте, граф Толстой Ырымбур ғәскәренең наказной атаманы вазифаһынан бушатылды; унын урынын полковник Петр Васильевич Зварыкин алды. Ырымбур ҡырғыҙҙары менән идара итеүсе Григорьев урынан көсләк менән төшөрөлдө, ул хатта батша ғали йәнәптәренә ғәҙелһеҙлек хаҡында ялыу ебәрә. Петербургҡа ҡайтҡас, уға 300 һумлыҡ пенсия менән отставкаға ебәрелеүе хаҡында әйтәләр. Ул һуңынан Санкт-Петербург университетында көнсығыш телдәре профессоры дәрәжәһенә өлгәшә, аҙаҡ Перовскийҙа эшләй, бер үк ваҡытта генерал-адъютант Тимашев янында Эске эштәр министрлығының цензура комитеты рәйесе һәм "Правительственный Вестник" гәзите мөхәррире була. Мин унын менән Петербургта осрашҡан саҡта ул Безак баҫымын нык ауыр кисереүе хаҡында һөйләне.

Яңы ғына хәрби министр итеп тәғәйенләнгән генерал-адъютант Милютин башҡорт ғәскәрен үҙгәртеп ҡороу хаҡында рәсми хат менән Безаҡҡа мөрәжәғәт итә, ул ғәскәрҙең әлеге хәлендә файҙаһыҙ булыуы хаҡында яҙа. Башҡорт ғәскәре менән идара итеү эшенең ҡыйынлығын һәм яңы реформаның уңышлыҙ булыу мөмкинлеген иҫәпкә алып, башҡорт ғәскәре менән командалыҡ иткән генерал Тетеревников Ырымбур линия батальондарынан төҙөлгән 23-сө пехота дивизияһы начальнигы итеп тәғәйенләнә һәм ҡалала тороп ҡала, тик Ҡаруанһарайҙан хәҙер граждан гимназияһы пансионы урынлашҡан ҡаҙна йортона күсергә мәжбүр була. Тетеревников урынына полковник Богуславский ҡуйыла, һуңғыһының урынын Безак үҙенең кейәүенә - кенәз Трубецкойға бирә. Ул ике йыл эсендә прапорщиктан Ырымбур казак ғәскәре есаулы дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Шулай итеп, идаралығының төүге ике йылында Безак төп етәкселәр урындарына үҙе һайлап алған кешеләрҙе ҡуя, ә был фаланга бер ауыҙҙан Александр Павловичты маҡтап ҡына тора. Безак үҙенең икенсе кейәүе Галкинды Ырымбур ҡырғыҙҙары идарасыһы ярҙамсыһы итеп ҡуя, был вазифаны биләгән Лев Николаевича Плотниковты, юғары белеме булмауына һылтанып, махсус бурыстар буйынса чиновник итеп кенә ҡалдыра: йәнәһе, министерлыҡтарҙа Безаҡҡа урындағы төп начальниктарға ярҙамсы итеп йәш һәм белемле кешеләрҙе ҡуйырға ҡушылған була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ



Башҡорт тархандары һанының XVIII быуаттың икенсе яртыһында кәмей барыуы батша хөкүмәтенең 1754 йылда дөйөм һалымды бөтөрөп, тоҙҙо ҡаҙнанан һатып алыу хаҡында сығарған указына ла нык бәйле, ахырыһы. Сөнки был указ башҡорт, мишәр тархандары менән түбән ҡатлам халыҡ хоҡуҡтарын тинләй. Һалым бөтөрөлгәс, льготаның кәрәге лә бөтә. Быны тоҙҙо һатып алыу "һалымы" алыштыра. Ә тоҙ өсөн тархандар ҙа ситләтелгән һалым түләргә мәжбүрҙәр. Был хәл тарханлыҡ исеменең дәрәжәһен төшөрә, социаль асылын юя.

Әлбиттә, быға ҡарап ҡына тарханлыҡ ҡапыл ғына һүнеп ҡалмай әле, традиция буйынса йәшәүен, исем-атын дауам итә. Күп кенә тархандар сауҙа эшенә биреләп, бында уларға ҡайһы бер өҫтөнлөктәр һаҡлана, килем-төшөм дә аҙ түгел.

Әммә дәрәжәле әҙәмдәргә, тархан заттарға береһе бөтһә, икенсеһе сығырға әҙер. XVIII быуат аҙағында башҡорттар кантонлыҡ системаһына күсерелә, ярым хәрби сословиеға әйләндерелә. Кисәге тархандарҙың абруйлыраҡтары кантон башлыҡтары булып китә, ҙур хоҡуҡлы яңы түрәләргә әүерелә. Күп тархандар офицерлыҡ дәрәжәләренә ынтыла. Өлкәнерәктәре, ил алдында ҙур хеҙмәт күрһәткәндәре урыҫ дворяндарына тиңләшер дворянлыҡ дәрәжәһен даулай башлай. Етмәһә, батша хөкүмәте 1845 йылғы ҡарары менән тархандарҙы барлы-юҡлы хоҡуҡтарын да мәхрүм итеп, ябай халыҡ кимәленә төшөрөп ҡуя. Был йәнә ризаһыҙлыҡты көсәйтә.

Батша хөкүмәте тарханлыҡ институтын, унын хоҡуҡтарын нисек бөтөрөп ҡуймаһын, тархандарҙы нисек кенә лә урыҫ дворяндары ҡатарына индерергә теләмәһен, кисәге тарафдарҙаштарының теләге менән күпмелер иҫәпләшергә лә мәжбүр. Элекке тархандарҙың ил алдында ҙур хеҙмәт күрһәткәндәре, иң абруйлылары, кантон башлыҡтарының күренеклеләре өҙлөкһөҙ юллауҙары буйынса йәйлап берәм-һәрәм дворянлыҡҡа күсерелә башлай.

Башҡорт дворяндары тарихы Екатерина II батшабикәнең 1785 йылда сығарылған Рәсәй Дворянлығы хаҡындағы указы нигеҙендә асыла. Был указ буйынса дворянлыҡ исемен биреү йә мәхрүм итеү хоҡуғы губерна дворян депутатлығы йыйылышы ҡарамағына тапшырыла. Ырымбур губернаһы дворяндары кеңәгәһенә ҡарағанда, 1793 йылда башҡорттарҙан беренсе башлап дворянлыҡҡа Күсәрбай һәм улы Аралбай Аҡсулпанов теркәлә. Шул ваҡыттан алып XIX быуаттың ҡырҡынсы йылдарына тиклем дворяндар нәҫел-тоҡомо кенәгәһенә барлығы 19 башҡорт дворян заты индерелә. Улар Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән юғары дәрәжәле чиновниктар йәки кантон башлыҡтары ғына. Башҡорт дворяндары династияһын барлыҡҡа килтергән затлы фамилиялар шулар: Аҡсулпановтар, Собханғоловтар, Бакировтар, Ҡәюповтар, Кейековтар, Моратовтар, Мусиндар, Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Тутаевтар, Йәһүдиндәр, Мәҡсүтовтар, Яһышевтар; шулай уҡ шәхси дворянлыҡты алған Ишмөхәмәт Сөләймәнов, Абдуллатиф Ғәмбәров, Ғисматулла Ҡайсаров, Мөхәммәткәрим Монасипов, Яҡуп Юнусов. Быларға тағы һуңыраҡ башҡорт Нуғайбәковтар, Рафиҡовтар, Өмөтбаевтар, Ҡотлобаевтар, Ибраһимовтар династияһы ялғана. Былар араһында дворянлыҡ дәрәжәһе нәҫелдән нәҫелгә күсер кантон башлыҡтарынан бигерәк тә Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Өмөтбаевтар, Ибраһимовтар, Ҡәюповтар династиялары ил һәм башҡорт халҡы алдында ҙур абруй ҡаҙана.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

### Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар тәүҙә болғарҙарға һәм татар-монголдарға, һуңынан Мәскәү дәүләтенә түләгән яһаҡ, нигеҙҙә тиренән торған. Болғарҙар хакимлыҡ иткән заманда һыуһар тиреһе тәңкәләрҙе алмаштырған, ә Мәскәү хакимлығы осоронда һәм унан һуңыраҡ, XVIII быуатта, яһаҡ һыуһар тиреһе менән иҫәпләнгән (бер тире 4 гривна торған).

Кәсепселек хайуандары тип ҡондоҙ, ҡама, һыуһар, төлкө, бүре, һеләүһен, кеш, аҫ, шәшке, йәтсә, тейен, осра тейен, ҡуян, йомран һаналған. Шулай уҡ айыуҙарға, мышыларға, ҡыр кәзәләренә һунар иткәндәр.

Боронғо һунар ысулдары тураһында беҙ бик аҙ беләбеҙ. Иң иртә мәғлүмәттәр XVIII быуатҡа, аныҡлап әйткәндә, унын икенсе яртыһына ҡарай. Һуңғы мәғлүмәттәр Башҡортостанда һунарсылыҡ бөтөү алдында торған ваҡытта тупланған.

Һунарсылыҡтың иң ябай ысулы булып ҡырғағай кәзәләрҙе ҡар шекәрәһе буйлап эҙәрләклеү торған. Яҙғыһын, көндәр йылытып, ҡар епшекләнгәс һәм унын артынса уҡ килгән һалҡындар һөҙөмтәһендә ҡар өҫтөндә боҙло ҡатлам барлыҡҡа килгән һәм ул кәзәләргә тиҙ йүгерергә ҡамасаулаған. Шул ваҡытта башҡорттар уларҙы эҙәрләкләп килеп тотҡан. Ҡайһы берҙә мышыларҙы ла шулай аулағандар. Уларҙы инде саңғы менән эҙәрләкләгәндәр. Бындай яҙмышҡа төлкөләр, бүреләр, хатта һеләүһендәр ҙә дусар булған.

Йәнлек эҙен тапҡас, ике һунарсы унын артынан бер нисә сәғәт дауамында хайуанды арыҡтансы саңғы менән эҙәрләкләгән. Йәнлек арып йығылғас, алдан килгән һунарсы уны суҡмар йәки балта төйәһе менән башына һуғып үлтергән. Бындай һунарҙа һунарсылар икәү йәки өсәү булған. Икәүһе хайуанды эҙәрләкләгән, ә арттағы өсөнсөһө йыйлы өҫ кейемен, аҙыҡ-түлекте күтәреп йөрөгән.

Йәнлектәрҙе төрлө тоҙаҡ ярҙамында аулау ысулдары йышыраҡ осраған һәм күп төрлө булған. Иң ябайы булып бүре аулау өсөн ҡаҙылған соҡорҙар торған. Уларҙы кәзән, диаметры ике метр, тәрәнлеге 3 метр булған түңәрәк рәүешендә ҡаҙығандар. Уртаһына һайғау ҡағып ҡалдырғандар. Унын үргә осо соҡор ситенән саҡ ҡына бейегерәк булып, сығып торған. Соҡор өҫтө ҡоро-һары, сыбыҡсабыҡ менән ҡапланған, ҡар йәки һалам менән күмелгән. Әйткәндәй, башҡорттар ҡапҡан сифатында соҡорҙарҙы һирәк файҙаланған, уларҙа төрлө тоҡандар, элмәктәр (тоҙаҡ) сағыштырмаса киң таралған.

Ҡуян тоҙағы, төлкө тоҙағы кеүек үк, ат ялынан үрелгән. Һуңыраҡ уларҙы нәҙек тимерсыбыҡтан үрә башлағандар. Бындай бер нисә тиҫтә тоҙаҡ ҡуян йәки төлкө һуҡмағына ҡуйылған. Һуҡмаҡ өҫтөнә ҙур булмаған ҡыуаҡ эйелтелгән, унын осона элмәктең бер осо бәйләп ҡуйылған. Ағас махсус ҡулайлама ярҙамында шулай эйелтелгән килеш ҡалдырылған. Элмәк иһә һуҡмаҡтан килгән йәнлек уға башы менән инерлек итеп ҡуйылған. Ҡуян йәки төлкө башын элмәккә тығыу менән ҡулайлама ысҡынған һәм ағас турайып, йәнлекте өҫкә күтәргән. Ҡайһы бер осраҡта элмәктең осо нәҙек һайғау осона бәйләнгән. Ул үҙ сиратында һуҡмаҡҡа яҡын үҫкән ағасҡа нығытылған. Унын аҫҡы осона, йәнлек башын элмәккә тығыу менән, ағас турайған кеүек һайғау ҙа күтәрелһен өсөн ауыр нәмә нығытылған. Төлкө тоҙағына өҫтәмә рәүештә ағас ҡалып та кейҙерелгән. Ул башын элмәккә тыҡҡан төлкөнөң муйынын ҡыҫып, уға элмәкте сәйнәп өҙөү мөмкинлеген бирмәгән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Сибай сәнғәт колледжында ысын мәғәнәһендә сәсәндәр мәктәбе эшләй. Урал аръяғында барлыҡҡа килгән был Үҙәк донъя кимәлендә билдәле булған башҡорт халыҡ эпостарын юғары кимәлдә башҡарыусыларҙы әҙерләй.*



# ИЗГЕЛЕК - ЕҢЕҮСЕ КӨС!

## "Урал батыр" эпосындағы ошо көс - беҙҙең йәшәү ҡағиҙәһе

**Сәсәниә, фольклорсы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, К. Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы уҡытыусыһы Асия Солтан ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНА менән һөйләшкәндән һуң ниңәлер ябай ғына, әммә мәғәнәле, тормошсан бер әкиәт иҫкә төштөсө: йәше еткән улы менән атаһы, мисәүле ат егеп, кәләш эҙләп сығып китәләр. Юлда осраған тәүге ауылда туҡтаған былар. Бына бер ҡыҙ көйәнтәләрен сайҡалтып, һыуға китеп бара икән. Атай кеше оҙаҡ уйлап тормаған, ҡыҙ алдында улын туҡмай башлаған. "Ниңә улыңды туҡмайһың?" - тип һораған ҡыҙ. "Әйткәнде эшләй", - тигән атай кеше. "Әйткәнде эшләгәс, һәйбәт бит", - тип, ҡыҙ егетте яҡлашҡан. "Ултыр, улым, беҙ эҙләгән ҡыҙ был түгел", - тип, былар ары киткән. Икенсе ауылда туҡтағандар. Күп тә тормай, бер ҡыҙҙың һыуға китеп барғанын күргәндәр. Ҡыҙ сибәр генә булһа ла, башы бер яҡҡа ҡыйышыраҡ икән. Атаһы тағы ла улын туҡмай башлаған. "Ниңә улыңды туҡмайһың?" - тип һораған ҡыҙ. Атай кеше: "Әйткәнде эшләй", - тигән тағы ла. "Дөрөҫ, туҡма әйҙә, - тигән ҡыҙ. - Үҙе белеп эшләһен, әйткәнде алйот та эшләй ул". Атай кеше ҡыуанып киткән. "Өйөгөҙ матур ғына, тик мөрйәһе бер яҡҡа ҡыйышыраҡ икән", - тигән ул. "Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға", - тип яуап биргән ҡыҙ. "Бына, улым, беҙ үҙебеҙ эҙләгәнде таптыҡ", - тигән атай.**

**Тәүге ҡыҙ ҙа, бәлки, үҙен ҡол хәлендә күрмәйҙер, әммә икенсеһе был тормошта үҙен иркенерәк тоя, тулы һулыш менән йәшәй. Мин үҙһүҙлелекте күҙ уңында тотмайым, үҙ фекерле булыуҙы һыҙыҡ өҫтөнә алам. Үҙһүҙлелек тәкәбберлеккә илтеүсе тар һуҡмаҡ булһа, фекерле булыу, йәғни төтөндөң төҙ сығыуы кешенең йәшәйеш офоҡтарын киңәйтә, камиллыҡҡа яҡынайта. Минеңсә, Асия Солтан ҡыҙының булмышы боронғонан ҡалғанды үҙе белгәнсә еткереү. Уға шундай бурыс йөкмәтелгән һәм ул ғүмере буйына васыят ителгәнде тормошҡа ашыра, тура юлдан бара. Уның һөйләгәндәренән бер кәлимә.**

### Халыҡ ижады - ҡаныбыҙҙа

Бөтә ғүмерем ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған халыҡ ижадына бәйле, улар минең тормошома мәғәнә бирә, йәм өҫтәй, асылыма ҡайтара, йәшәйешемде маҡсатлы итә, дөрөҫ юлдан барырға йүнәлеш бирә. Һәр әҫәрҙең йөкмәткеһенә һәм башҡарылыу оҫталығына ҙур иғтибар бүләм. Утыҙ йыл эсендә төрлө мәктәптәрҙә әҙерләгән бөтә балаларым да "Урал батыр" эпосын тик һаҡлап, һамаҡлап ҡына һөйләне һәм төрлө һаҡлап, һамаҡлап һөйләгәндә телебеҙҙең ул сифаты шул тиклем матур күренә. Аңлата-төшөндөрә торғас, мине баһалама комиссияһы составынан төшөрөп ҡалдырҙылар, сөнки мин һамаҡлап һөйләмәгән бер кешегә лә яҡшы билдә ҡуйманым.



Эпостың төрлө сит телдәргә тәржемә ителгән өҙөктәрен ятлау ҙа дөрөҫ түгеллеген иҫбат итергә тырыштым. Мәҫәлән, инглиз телендә һөйләгән бала үҙе ни һөйләгәнен аңлаймы-юҡмы? Ете телде аңлау кимәлендә үҙләштергән берәй бала бармы конкурсантар араһында? Институтта инглиз теленән уҡытҡан кеше булараҡ әйтәм, юҡ! Мин сит телдә һөйләгән балаларға үҙҙәре һөйләгән өҙөккә бәйле ябай ғына һорауҙар бирәм, ул бала ни тураһында һөйләгәнен белһә, яуап бирә ала. Ҡыҙғаныҫҡа, ундайҙар юҡ кимәлендә. Аңламай ятлауҙан ни фәтеүә! Быңдай йүнәлештә эшләү төптө хата. Сит телдә һөйләгәндәргә баһа биргәндәй белгестәр кәрәк бит. Ҡайҙа улар? Юҡ! Мәҫәлән, ҡырғыҙҙар "Манас"ты, яҡуттар олонхоно төрлө телдә һөйләтмәйҙәр.

Хәҙер тағы бер йәмһеҙ күренеш пәйҙә булды: эпос һөйләгән ваҡытта йә айғыр булып кешнәп ебәрәләр, бейеп китәләр, йә сәхнәлә аунай башлайҙар. Ә бит эпосты тыңлағандар уны тыныс ҡына ҡабул итергә тейеш. "Урал батыр" эпосын дөрөҫ башҡарыу, тыңлаусыны алйытмау минең өсөн иң мөһиме. Мәҫәлән, үҙем һөйләгәндә ауыҙымды асып, бер тына йоҡлап киткән саҡтарым була. Үҙем уны һиҙмәйем, бер ни булмағандай, тын алырға туҡтаған кешеләй, артабан дауам итеп алам да китәм, сөнки эпостар оҙаҡ һөйләнелә, башҡарыусы һикерәңләп йөрөргә, бейергә, ауынарға тейеш түгел. Мәҫәлән, яҡуттар аяҡ салып ултыра ла, һамаҡлаған ерен һамаҡлап, һөйләнеләһен һөйләп тик ултыра. Уларҙа музыкаль яҡтан оҙатыу ҙа юҡ. Алтайҙарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа, ҡалмыҡтарҙа думбыра ҡулланалар. Әлбиттә, музыка ҡоралын ҡобайырлап, һамаҡлап әйткән ерендә ҡулланырға була, иллә мәгәр эпос - бөтөнләйе менән тыныс әйтелә торған әҫәр. Ауыҙыңа ҡурай тыҡтың икән, йыр булған урынын ғына уйнарға була. Мәҫәлән, Айрат Ҡобағошовтың "Ете ырыу башҡорт халыҡ йырҙары" тигән китабында "Ҡәһҡәһә" тигән йыр бар. Ниңә ул шулай тип бирелгән? Дөрөҫөндә, уны "Урал батыр" эпосынан өҙөк тип аңларға кәрәк. Эйе, ошо өҙөк йырланыла, һамаҡлап әйтелмәй һәм ул ҡурайҙа уйнай белеүеңде күрһәтеү өсөн ҡулланылмай.

### Төп нөсхә - рух

Тәржемәләр тураһында айырып әйтергә кәрәк. Эпостың Уралды атаһы һуйыл менән һуға башлаған урынын башҡорт телен һәйбәт белмәгән бер кеше урыҫ теленә, дубинка менән туҡмай башланы, тип ауҙарған. Суҡмар һуғышта, йә һунарҙа айыу һуҡҡанда ҡулланыла, балаға һуғыу өсөн түгел. Инглизсәгә әйләндергән кеше лә "sukmar" тип инглизсә яҙып ҡуйған. Бына нисек барлыҡҡа килә хаталар! Балаларын күтәреп кенә йөрөткән, матур тәрбиә биргән, бер ҡасан да ауыр һүҙ әйтмәгән атай-әсәйҙәргә ғәзиздәренә суҡмар менән һуғыу ҡырағайлыҡ бит! Уларҙың эпосында шулай булғас, көнкүрештәрендә лә шулай икән, тип уйлай бит инде инглиз кешеһе. Аламалыҡ шулай башлана. Башҡорт телен белмәй, башҡортса аңламай икән, "Урал батыр" эпосына бөтөнләй тотонмаһын!

Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, тигән һөйләмде "Пусть хороший конь будет вашим спутником" тип тәржемә иткәндәр. Ҡайҙан соҡоп сығарғандар атты-йылҡыны? Бында бит һүҙ кешенең есеме, күңел аҙығы тураһында бара! Шуға күрә тәржемә иткән кеше башҡорт телен төплө белергә тейеш. Француз йә инглиз теленә урыҫ теленән тәржемә иткәндәр хаталарҙы нисек бар, шулай ауҙаралар, тәржемәләге хаталар шулай башлана.

### Йәшәү көсө

Беҙҙең бөтә эпостарыбыҙ ҙа позитив энергиялы. Улар хәтерҙе генә яҡшыртмай, һаулыҡты ла нығыта, йәшәүгә көс бирә. Бөгөнгө көндә төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа еңеүгә өлгәшкән Мирасбай Үҙәнбаев башта беҙҙең Сибай сәнғәт колледжында уҡығанда ике һүҙҙе бәйләй алмай теле тотлоға ине. Тәүге осрашыуҙа мөлдөрәп кенә ҡарап, өнһөҙ ултырғанын бөгөнгөләй хәтерләйем. Уның күңелен асыр өсөн халҡыбыҙ ижадынан балалар өсөн тәғәйен өҙөктәрҙе үҙемә эйәртеп ҡабатлата башланым. Шулайтып ул бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, теле тотлоғоуын онотоп, ижад донъяһына сумды. Шул йылда уҡ ул Бөтә Рәсәй конкурсында дипломант, икенсе йылында лауреат булды. Хәҙер, ана, донъя буйлап гастролдәрҙә елеп йөрөй!

### Хаталар хаттин аша

Беҙ бәләкәй саҡта эпос тигән һүҙ булманы, әкиәт тинеләр, ҡобайыр тип тә әйтә торғайныҡ. Әсәйем Баймаҡ районының данлыҡлы Хисмәтуллиндар тоҡомонан, атайым Хәйбулланың затлы тоҡомонан. Сәсәнлек беҙҙә ҡандан күсә килә. Ҡартатайымдың ике һеңлеһе Бибикамал менән Ғилмиямал бер-береһен әйтешеп еңә алмаһалар, сәстәренә йәбешеп һуғышып китә торған булғандар. Әсәйем "Аҡһаҡ ҡола" эпосын мандолинаға ҡушылып һөйләй ине. Былайтып һамаҡлауҙы ул танылған яҙыусы Батыр Вәлидтән отоп алған булған. Был эпостың 18 варианты ташҡа баҫылған, унда әсәйем һөйләгәне лә бар. Ниңәлер "Биш ҡолон" тигән варианты башҡорт халыҡ йыры тип яҙылған. Дөрөҫөндә, ул башҡорт халҡының "Аҡһаҡ ҡола" эпосынан, ҡобайырынан өҙөк тип яҙылырға тейеш. Был турала "Китап" нәшриәтендәгеләргә әллә нисә тапҡыр әйттем. Мәҫәлән, ике-өс куплетлыҡ йыр яҙған кешеләрҙе фәлән-фәлән спектаклдән фәләндең һүҙҙәре, фәләндең көйө тип бер хатаһыҙ яҙалар, ә "Аҡһаҡ ҡола"эпосының бер вариантын башҡорт халыҡ йыры тип яҙыу хата икәнен аңламайҙар.

### Ят ярлыҡамаҫ

Ҡырғыҙстанда, эпостарҙы ҡатын-ҡыҙҙар һөйләргә тейеш түгел, тигән ҡағиҙә йәшәй. Ниңә улай икәнен аңлар өсөн "Манас" эпосының башҡортсаға тәржемәһен уҡып сыҡтым, әллә нисә тапҡыр уҡып бөтмәй, ташлап ҡуйҙым хатта. Уны ҡатын-ҡыҙҙар башҡарһа, ҡорһағында ятҡан бала ауырыу булып тыуа, йәки үле тыуа, тиҙәр. Сөнки ҡырғыҙҙарҙың эпосында кешене нисек итеп ҡылыс, йәки хәнйәр, уҡ менән ыҙалатып үлтереү тураһында бәйән ителә. Нисек ағыуларға, ҡайһы еренә атырға, ҡырҡырға, тишергә - бөтәһе лә өйрәтелгән. Ул - һуғышсы өсөн ҡуллана торған әсбап.

Ҡалмыҡтарҙа ла эпостарын ҡатын-ҡыҙҙарҙан һөйләтмәйҙәр. 2005 йылда унда булғанда сәхнәнең артҡы яғындағы атҡа атланған ҡалмыҡ һүрәте аптыратты. Ул һуғышсы эйәренә, шешкә теҙгән балыҡ кеүек, кеше баштарын йыйған. Ҡарап тороуы ҡурҡыныс хатта. Әллә рәссам артыҡ мауығып киткәнме, ул баштар араһында ҡанға батҡандары ла, кибеп һөйәккә әйләнгәндәре лә бар. Ниңә быңдай ҡурҡыныс әйберҙе сәхнәнең түренә ҡуйғанһығыҙ, тинем. Баҡтиһәң, ҡалмыҡтарҙа батырлыҡ үлтергән кешеләр башына ҡарап баһалана икән. Шуға ла уларҙағы "Жаңһыр" эпосын да бисәләр һөйләй алмай, сөнки ул да ирҙәр өсөн һуғышсы әсбабы һанала.

Ә беҙҙең "Урал батыр" эпосын ир-егеттәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа башҡара ала, беҙҙә ундай сикләү юҡ. Сөнки беҙҙең эпос Изгелеккә дан йырлай. Уны һөйләп, ишетеп үҫкән балалар бер ҡасан да үҙенең халҡына ла, башҡа халыҡҡа ла, тәбиғәткә лә насарлыҡ, яһиллыҡ ҡылмаясаҡ.

### Тын алайым бер тала...

Конкурстарҙа гел беренсе урындарҙы алды. Ул ғына ла түгел, әлеге көндә Өфөнөң Затон биҫтәһендә балалар баҡсаһында эшләгән элекке уҡыусым Әлиә Әминева-Ишдәүләтова бәләкәй балаларҙы "Урал батыр" эпосы йөкмәткеһенә таянып тәрбиәләй. Ваҡытында ул республика конкурсында еңеүсе булды, Ҡаҙанда үткәрелгән Рәсәй тәрбиәселәр конкурсында ла еңеүгә өлгәште.

Әлиә Сибайҙағы башҡорт лицейында (ул ваҡытта 13-сө мәктәп тип атала ине) уҡыны. Уны мәктәптә уҡып йөрөгән сағында уҡ Сибай мәктәптәрендә үткәрелгән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса һайлап алыу турҙарына баһалама комиссияһы составына индерҙем. Ул мәктәптәрҙә балаларға "Урал батыр" эпосын һамаҡлап һөйләргә өйрәтеп тә йөрөнө. Аҙаҡ Әлиәм институтҡа башҡорт теле бүлегенә уҡырға инде, параллель рәүештә логопед һөнәрен дә үҙләштерҙе. Кейәүгә сыҡҡас, Яҡутстанға Ленск ҡалаһына эшкә киттеләр. Һаман да минең менән "Урал батыр" эпосы буйынса шөғөлләнеүен дауам итте. Ленск ҡалаһында үткән "Донъя эпостары" конкурсында ул Гран-при яуланы!

Әллә нисә йыл рәттән "Дөрөҫ башҡармайынса, "Урал батыр" эпосын юҡҡа сығараһығыҙ", тип ҡабатлап киләм. Башҡорт телендә баҫым һәр ваҡытта ла һуңғы ижеккә төшә, шул ҡағиҙәне

## Һыҡтау - илау түгел

Төркиәлә Сирияға сиктәш ҡалала эпостар фестивале булырға тейеш ине. Нәҡ шул мәлдә ҡаланың һигеҙ кешеһен курдтар һуйып сыҡҡан, тип, траур иғлан иттеләр. Фестивалде туҡтаттылар. Бер көн алда ҡаланың башлығы, губернатор беҙҙе үҙендә ҡабул иткәйне. Осрашыу ваҡытында мин Һомайҙың һыҡтаған ерен һөйләп ишеттерҙем. Әхәт Сәлихов тәржемә итеп ултырҙы. Иртәгеһенә фестиваль асылырға тейешле Клеопатралар осоронан ҡалған аренаға йыйылдыҡ. Шунда йыйылған халыҡ араһынан һүҙҙе тик миңә генә бирҙеләр, уларға Һомайҙың һыҡтауын ишеттерҙем. Ирен, атаһын, улын юғалтҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡайғыһы "Урал батыр" эпосындағы һыҡтау булып сағыла, тинем дә, Һомайҙың һыҡтаған ерен һөйләп, уларҙың ҡайғыларын уртаҡлаштым. Шуның менән, беҙҙә кеше үлгәндә ҡысҡырып илау юҡ, тик һыҡтау ғына бар, тигәнде лә аңғартып ҡуйҙым.

## Беҙ эпослы халыҡ!

Башҡорттар төрки халыҡтары араһында Ислам динен иң беренселәрҙән ҡабул иткән. Әгәр ҙә ата-бабаларыбыҙҙың тәбиғәткә ҡарашы, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте Ислам диненең ҡанундарына тап килмәһә, башҡорттар уны ҡабул итмәҫ ине. Уға саҡлы "Урал батыр" эпосын белгәнбеҙ, ул беҙҙең изгелек кодына, конституциябыҙға әйләнгән. "Урал батыр" эпосында әйтелгән, бирелгән ҡанундар бөтәһе лә Ислам динендә лә бар. Тиктомалға берәү ҙә беҙҙе, аҫабыҙ, һуябыҙ, тип ҡурҡытып дингә алып килмәгән. Беҙгә килгән сәхәбәләрҙе тыңлап, уларҙы ихлас ҡабул иткәнбеҙ, тик яҡшылыҡ, изгелек яғында булғанбыҙ.

Башҡорт теленә лә донъяны, кешелекте һаҡлап алып ҡала торған код һалынған. Аргентинала ла шундай уҡ кодлы бер халыҡ йәшәй, тиҙәр. Яуызлыҡ, ғурылыҡ, һатлыҡлыҡ, фәхишәлек, икейөҙләлек һәм башҡа шундай насар сифаттар өҫтөнлөк итте ниһә, ундай халыҡты еңеп, ҡол итергә була. Аллаһҡа шөкөр, былдай сифаттар халҡымдыҡы түгел, тип ышанайыҡ, уларҙы йәндәребеҙгә индермәйек. Тоғролоҡ өҫтөнлөк итә холҡобоҙҙа, шуға ла үҙебеҙҙең Уралға сат йәбешкәнбеҙ ҙә, йәшәп ятабыҙ бит әле...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Асия Солтан ҡыҙы тиҫтә йыл дауамында Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжында уҡыта. Бөгөнгө көндә бында ысын мәғәнәһендә сәсәндәр мәктәбе эшләй. Урал арьяғында барлыҡҡа килгән был Үҙәк республикаға ғына түгел, донъя кимәлендә билдәле булған башҡорт халыҡ эпостарын юғары кимәлдә башҡарыусыларҙы әҙерләй.**

**Тәү ҡарамаҡҡа изгелек тик һөйөүҙән тыуылған нескәлек һымаҡ тойола. Яуызлыҡ ҡара яу булып ябырылып килгән ҡурҡыныс көс һымаҡ. Бәхеткә күрә, тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай был! Ысынында, изгелек - еңеүсе көс. Әкиәттәрҙә генә түгел, тормошта ла!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# "ТАМЫРҺЫҘ КЕШЕЛӘР ОҘАҠ ЙӘШӘМӘЙ",

## йәғни, Хирург Углов нәсихәттәренән



**Оҙаҡ йәшәү сере быуаттар буйына кешелекте ҡыҙыҡһындырған, оҙон ғүмерлеләргә бөтәһе лә һоҡланып та, хатта бер аҙ көнләшеп тә ҡарай һәм үҙенә шундай һорау бирә: быных сере ниҙә һәм ундай бәхеткә эйә булыуҙың сәбәптәре ҡайҙан?**

Ә бит ҡайһы берәүҙәр оҙаҡ йәшәү менән бергә оло йәштә лә теремек, зирәк һәм камил аҡыллы, маҡсатына ынтылышлы булып ҡала. Мәҫәлән, шундай һоҡланғыс кешеләрҙең береһе 104 йәш йәшәгән Федор Григорьевич Углов - билдәле хирург, донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә академик, медицина фәндәре докторы, профессор. Медицина өлкәһен бик күп яңы идеялары менән байытҡан был табиб үҙенең шәхси оҙон ғүмерлеге системаһын эшләп ҡалдырған. Тап бына шул система уға әүҙем оҙон ғүмерле булып йәшәргә ярҙам иткән дә инде. XX быуаттағы һуғыштарға, иҡтисади көрсөк һәм киң таралыусы сирҙәргә ҡарамайынса, Углов иҫән ҡалыу ғына түгел, аҡыллы, белеме менән дан ҡаҙаныу кимәленә күтәрелә алған. Уның исеме 100 йәшенән һуң да хатта ҡатмарлы операциялар яһаусы иң өлкән һәм тәжрибәле, алтын ҡуллы хирург булараҡ, Гиннесс рекордтар китабына индерелгән. Билдәле Америка кардиохирургы Майкл Дебейки һөнәрҙәше хаҡында шулай тигән: "Профессор Углов - милли хазинаға тиң шәхес. Ул хирургия кимәлен һеҙҙең илдә йыһанды үҙләштереүҙәге ҡаҙаныштар бейеклегенә күтәрҙе..."

Угловтың бөтөн тормошо ныҡлыҡ һәм тәртип өлгөһө булып торған. Ваҡытында шулай ҙа уға ла йыш ҡына фажиғәгә килтереүсе йоғошло сирҙәр менән көрәшергә тура килгән, әлбиттә, ләкин әлеге оҙон ғүмерлелек системаһы һәр ваҡыт уға ярҙам иткән. Бына ул Углов үҙ тормошонда ҡулланған 12 ҡағиҙә:

**1. Тыуған илгә һөйөү.**

Углов фекеренсә, илһөйәрлек - ул милли ғорурлыҡ ҡына түгел, ә маҡсат һәм эшеңә бирелгәнлек тойғоһо ла. Илгә һөйөү Угловҡа тормошонда ныҡлыҡҡа эйә булырға ярҙам итә. Ул йыш ҡына: "Тамырһыҙ кешеләр оҙаҡ йәшәмәй", - тип ҡабатларға яратҡан.

**2. Рәхмәтле булыуға өмөт итмәй генә изгелек ҡылығыҙ.**

Углов эскерһеҙ хеҙмәт ҡеүәтенә ышанған. Башҡаларға ярҙам итеүҙән ул ҡәнәғәтлек тапҡан һәм изгелектең үҙенән-үҙе сауаплы ғәмәл булыуы тураһында ҡабатлаған. Уның хирургияға бирелгәнлеге байлыҡҡа ла, хөрмәткә лә ынтылыш түгел, ә сирлене һауыҡтырыу теләге менән бәйле булған. Бына табибтың һөнәренә бирелгәнлеге, унан бигерәк, бәләгә тарыған сирлененң хәленә керә белеүе сағыла. Психологтар әйтмешләй, альтруизм (кеше хаҡында эскерһеҙ хәстәрлек) һәм социаль бәйләнештәр оҙон ғүмерлелек һәм бәхет тойғоһоноң төп факторҙары.

**3. Үҙ ғүмерегеҙ өсөн үҙегеҙ яуаплылыҡ алығыҙ.**

Был да кеше ғүмере оҙайлығына булышлыҡ итә, тип ышанған Углов һәм көндәлек тормошта һаҡланып йөрөргә, сәләмәт ғәҙәттәргә эйә булырға, стресс менән идара итә белергә өндәгән.

**4. Үҙ-үҙегеҙҙе контролдә тотоғоҙ һәм ниндәй генә хәлдәрҙә лә ныҡ булығыҙ.**

Тормош һәр кемдең дә юлына көтөлмәгән хәлдәр сығарып ҡуйыусан һәм быны һөҙөмтәһе һеҙҙең шуға ҡарата тәьҫирегеҙгә, мөнәсәбәтегеҙгә бәйле. Углов хистәр тәртибенә ышанған һәм уңышһыҙлыҡтарға үҙенең рухын һындырырға ирек ҡуймаған. Угловтың ҡатыны Эмилия Викторовна табибтың оптимизмы хаҡында былай тип хәтергә алған: "Эштән ул һәр ваҡыт шат күңел менән ҡайта һәм һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа күтәренке, ҡыҙыҡлы хәл тураһында һөйләй ине. Беҙҙе насар хәбәрҙәр менән ҡайғыртырға тырышманы, тик шуңайға көйләнеш тотто. Шуға ла ул ҡайтып инеү менән өйөбөҙ эсе яҡтырып киткәндәй тойола ине. Ул оптимист!"

**5. Ғаиләгеҙҙе баһалай белегеҙ.**

Эшкә, һөнәренә ныҡ бирелгәнлеге Угловҡа ғаилә тормошонда бәхетле булырға ҡамасауламай. Углов үҙ мөхәббәтен бик һуң, 60 йәшендә кардиолог Эмилияға өйләнгәс таба. Араларында 32 йәш айырма уларға һис ҡамасауламай: мөхәббәттәре ышанычлы һәм ныҡлы була. Угловҡа 66 йәштә улдары донъяға килә. Бәхетле никах менән 44 йыл татыу, матур ғүмер итә улар.

Шулай итеп, Углов үҙ яҙмышы миҫалында яратыу өсөн бер ҡасан да һуң түгеллеген иҫбатлай. Ғаилә ысын мәғәнәһендә уның терәгенә әйләнә. Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, яҡындарыңдың һөйөүе иммун системаһын нығыта, елһенеүҙәрҙе, стрестарҙы кәметә, дөйөм үҙтойғоно яҡшырта, томоштан ҡәнәғәтлек тойғоһон көсәйтә.

**6. Аҡыл һәм физик хеҙмәтте аралаштыра белеү - бөтөнлөк үҫешенең асҡысы.**

"Эшмәкәрлекте алыштырып тороу - иң яҡшы ял ул",- тип ҡабатлаған хирург. Әйткәндәй, ул хирург ҡына түгел, билдәле яҙыусы ла булған. Уның һул ҡулын уң ҡул эшләгән кеүек күнектереп өйрәтеүе үҙенә күрә шәхси ҡаҙаныш ул. Тап бына ошо һәләте табибҡа өлкән йәшендә лә ҡатмарлы операциялар эшләргә, аҡыл һәм зиһен камиллығын һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. Ғөмүмән, табиб шөғөлдәр төрлөлөгөнөң көсөнә ышана. Был, уның фекеренсә, мейелә яңы нейрондар бәйләнешен булдырырға, Альцгеймер сиренән һаҡланырға ярҙам итә. Аҡыл йәһәтенән әүҙемлекте үҫтереү өсөн яңы күнекмәләр үҙләштереү, башватҡыстар сисеү, ижад менән, мәҫәлән, һүрәт төшөрөү йә музыка менән шөғөлләнеү мейе әүҙемлегенә булышлыҡ итә.

**7. Ҡыҙыҡһыныусан булығыҙ, аҡыл зирәклеген һаҡлағыҙ.**

Бөтөн ғүмере буйына уҡыу, белемгә эйә булыу Углов философияһында төп урынды алып тора. Өлкән йәштә лә ул медицина яңылыҡтары менән танышып бара, фәнни журналдарҙы мөхәррирләй, хәтерен күнектереү өсөн шиғырҙар ятлай. Уның китаптары, шул иҫәптән "Үҙебеҙҙең көндәрҙе тиклем йәшәрбеҙме?" һәм "Кеше ғүмере бик ҡыҫҡа" тигән хеҙмәттәре сәләмәт тормош рәүеше һәм оҙайлы ғүмер серҙәре хаҡында булып, киң танылыу ала. Бик ныҡ ологайғас та табиб үҙенең интеллект ҡеүәһен юғалтмай. Тап ана шул аҡыл әүҙемлеге уға быуаттан ашыу ғүмер йәшәргә мөмкинлек бирә лә инде.

**8. Туҡланыуҙа сама белергә.**

"Билең нескәрәк булған һайын, ғүмерең оҙайлыраҡ булыр", тигән хәҡиҡәт бөтәбеҙгә лә яҡшы таныш. Углов ябай, ярлы ғаиләлә тыуып үҫә, күп ваҡыт ашарҙарына етешмәй. Иртә йәштән алынған был тормош тәжрибәһе буласаҡ табибҡа самалап ашау һәм аңлы рәүештә туҡланыу ғәҙәтен булдыра. Ул туҡланыу буйынса бөгөнгө фәнгә ярашлы, тәбиғи һәм эшкәртелмәгән ризыҡҡа бай диета өсөн сығыш яһай һәм күп ашауҙың хроник сирҙәргә килтереүе хаҡында иҫкәртә. Фәнни тикшеренеүҙәр ҙә быны раҫлай һәм калориялар ҡулланыуҙы сикләүҙең кеше ғүмерен оҙайтыуҙа бер ысул тип иҫәпләй. Нигеҙҙә туҡлыҡлы матдәләргә бай булған балыҡ, йәшелсә, бөтөн бөртөклө ярмаларға өҫтөнлөк биреү кәрәк.

**9. Көүҙә ауырлығын сәләмәт кимәлдә тоторға!**

Артыҡ ауырлыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары, диабет һәм ҡайһы бер яман шеш сирҙәренә килтереүе ихтимал. Көүҙә ауырлығын ҡәтғи контролдә тотоу ғүмерҙе бер нисә йылға оҙайта. Углов ғүмере буйы физик йәһәттән әүҙем, енел көүҙәле була, шул уҡ ваҡытта ул көс күнегеүҙәре менән шөғөлләнә һәм үҙ миҫалында көүҙә ауырлығының генетикаға түгел, ә тәртипкә ныҡ бәйле булыуын иҫбатлай. Бигерәк тә ул шәкәрҙән һәм ҡат-ҡат эшкәртелгән ризыҡтарҙан баш тартырға саҡыра.

**10.Эш менән ял ваҡыты тигеҙләгеп һаҡлау - сәләмәтлек нигеҙе.**

Сәләмәтлек нигеҙе - режим. Углов көн тәртибен ҡәтғи һаҡлай: иртә тора, иртә йоҡларға ята. Йәҙ йәшендә ул утын ярған, ҡар көрәгән һәм даими рәүештә спорт менән шөғөлләнгән.

**11. Тәмәке һәм алкоголдән ҡасығыҙ.**

"Бер ваҡытта ла тәмәке тартмағыҙ, араҡы эсмәгеҙ, юғиһә, сәләмәт тормошҡа ынтылышығыҙ юҡҡа сығасаҡ",- тигән ул. Табиб үҙе эсмәгән, хатта составында спирт булған дарыуҙар ҡулланыуҙан да баш тартҡан.

**12. Оҙон ғүмерлелек аҡылын киләсәк быуындарға тапшырығыҙ.**

Академик Углов балаларҙы сәләмәт ғәҙәттәргә өйрәтеү мөмкин тиклем иртәрәк башланырға тейеш, тип иҫәпләгән. Икенсенән, ул йәш быуынды бөгөнгө киң мәғлүмәт шойҡононан, мәғәнәһеҙ күңел асыуҙарҙан аралауҙы талап иткән.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

***✓ Һинең дә улыңды табабыҙ, туған. Үлем көтөп ултырғанда мин үҙемә нәҙер итеп әйттем. Үҙем, шәхсән үҙем табып, атаһының ҡаһарманлығын аңлатып бирәсәкмен.***






...Бына шундай уйсан егет ине ул. Оҙаҡ ҡайтты Ибраһим ул көндө өйөнә. Менәр ҡабат үткән урамдан барғанда, ниндәй бәхетле йылдар, көндәр, сәғәттәр, минуттар, секундтар ошонда уҙғанын бөтөн булмышы менән, хатта аяҡ табандары менән тойҙо. Мәктәбенә инмәне. Етәкселек менән күптән һөйләшеп, килешеп ҡуйғайны; уҙ телеге менән тигән ғаризаһы күптән бирелгән, датаһын ғына ҡуйырға кәрәк - ҡуйырҙар. Урамда төрөлгән ҡыҙыл келәмде йөкмәп йүгергән йәш кенә ҡатын тап булғайны. "Ҡыҙыл келәмдәрен ҡалдырып киткәндәр. Алып китегеҙ, тип арттарынан йүгерҙем. Ҡуҙғалдылар ҙа киттеләр", - тине мәҙәниәт йорто директоры. - Башҡа беҙгә кәрәкмәмен", - тип ҡысҡырып ҡалдым". Күҙҙәрендә ҡайғы, хәүеф, сараһыҙлыҡ... "Кәрәкмәмен, һеңлем", - тигәйне Ибраһим. Кәрәкмәмен ине...

Әле күҙ алдына йәнә шул ҡыҙыл келәм, мәҙәниәт йортоноң күтәрмәһе, оҙон өстәл, Рәсәй флагы айырмасыҡ булып күҙ алдына килеп баҫты. Тик ҙур портреттағы үҙен танымады.

* * *

–Кәләш, - тигән булды ул киске аштан һуң мөмкин тиклем шаянҙыраҡ булырға тырышып. - Мин өй һалдым, бер түгел, ике ул, бер ҡыҙ үҫтерҙем. Агасты, берҙе түгел тотош баҡса, ултырттым. Ирҙәргә йәмгиәт йөкмәткән бурысты үтәнем. Инде минең иректә булырға тулы хоҡуғым барҙыр тип уйлайым.

- Нимә сурытаһың? - тип көләмһерәне ҡатыны. - Әллә йәш бисә алырға итәһеңме?

- МХО-ға юлланам, кәләш. Өс көндән. Кәрәк-ярақты Өфөнән алырмын.

- Бына бит, кеше менән йылдар буйы йәшәйһең, ә башында нимә барын һис белеп булмай. Ә мин нишләп иртәнсәк йүгерә, гер күтәрә, тип аптыраған булам. Әҙерләнгәнһең икән... Ә эшең һуң?

- Һөйләшелгән, - әйткән булды ла, күҙ алдындағы ҡорманы тартып асҡан һымаҡ, бөтәһен дә аңланы. Аҡыллы тәрән күҙҙәрҙең моңһоу ҡарашынан... Ҡатыны барыһын да һиҙеп-белеп йөрөгән, белмәмеш һәм күрмәмешкә һалышҡан...

"Йән серенде йәшерә алмайынса, күңелемдең иң тәрән сөмбәйҙәрен яҡтыртҡан ошо ғәжәп күҙҙәрең, аҙмыштың бөтә һынауҙарын уртаҡлашҡан тоғролоҡ менән түҙемең өсөн нимә тип әйтһәм дә бөтөн бәхетемде асып бирә алмам".

"Һин китһәң, ошо ҡотло донъяһыҙҙың ҡото бөҫкәрер. Иң яҡты уттарҙы яндырып ҡуйһам да һин барҙағы һымаҡ йәме булмаҫ, әле балҡып торған йортобоҙға уртаҡ һағышыбыҙ тулыр".

Һүҙҙәр артыҡ ине, күптән тойғолар уҡмашҡан, ҡараштар аңлашҡан ике йәнгә. Шулай ҙа ҡатыны хушлашҡанда әйтте:

- Туй көнөбөҙҙә һинә ҡарап, кешене кеше шулай нык ярата аламы икән ни, тип үҙемдең тойғома үҙем ғәжәпләнгәйнем. Әле утыҙ йыл үткәс аңлайым: мин ысын, тәрән тойғоноң ниндәй көслө була алғанын ул ваҡытта бөтөнләй белмәгәнмен.

"Мин дә белмәгәнмен, - тип уйлай әле Ибраһим күңелендә ошо мөкәддәс тойғоноң ҡотон тойоп. Фанилыҡ менән баҡыйлыҡтың ошо ҡот менән бер-береһенә тоташҡанынан төшөнөүҙән ҡапыл уға енел, яҡты, рәхәт. Гүйә лә ошо тойғо ҡабаттан уның кендеген тормош ағымына тоташтырҙы.

* * *

Әсабир өсөн тормошта иң төп һүҙ - кәрәк. "Һин кәрәкһең!" - тип әйтһәң, тауҙар аҡтарыр. Ә әлеге минутта уға, бер нимәгә ҡарамай тамаҡ ялғарға кәрәк. Туҡтауһыҙ бығырлаған ҡорһаҡ бер ҡабырлыҡ та ризыҡ юҡлығы менән һис килешергә теләмәй.

- Абзый, - тип өндәште Сабир "Мамай"ға терһәге менән төртөп.

- Йә...

- Күҙ алдында тик тора...

- Нимә?

- Һығылып үҫкән ҡыҙыл алма. Ғүмеремдә ундайҙы күргән юҡ ине. Өҫкә менеп килгән танк ишараты, һинең гранатаң шартлағас, шул алмағаҫҡа төкөп тигәндәй туктаны бит. Алмалары шыптырлап ергә ҡойолдо. Шунда тумарлашып яталарҙыр инде, ибет.

- Танк үҙе шартламаны бит, - тип һүҙгә ҡыҫылды Байсар. - Башняһы аҡтарылды ла көбөгә ҡыйшайҙы.

- Абзый, ул нәмә танк инеме ул, БМП-мы?

- Французлдарҙың тәгәрмәсле танкы, - тип яуапланы "Мамай".

- Ә бит тәгәрмәстәре эшкинһә, яғыулығы етерлектер... - Башына килгән фекерҙән Байсар тулҡынланып китте, тауышы ҡалтыраны.

- Двигателенә зыян килмәҫкә тейеш былай...

- Шунан-шунан? - Уларҙы тыңлап ятҡан Азамат ҡыҙыҡһынып ҡалҡынды. Хатта Ибраһим да башын күтәрҙе.

- Ә кем йөрөтә?

- Минең трактор йөрөткәнем бар...

Шом булып һауала аҫылынып торған үлем менән әсирлек хәүефен һирпеп ташлағандай дәртләнеп план ҡорорға керешеп киттеләр.

- Нисек тә һәйбәт буласаҡ... - тине Азамат. - Тейәләйек. Двигателе боҙоҡ булғанда ла боекомплект ҡалғандыр... Һағыҙаҡ ояһында тишек-ярыҡ һарайҙа ултырғансы... Йә ҡасып ҡотолабыҙ, йә...

- Йә үлеп ҡотолабыҙ, - тип тамамлап ҡуйҙы Сабир. - Бер шартлауҙан, тап күктең етенсе ҡатына... - Инде уйында әлләнисә тапҡыр үлеп терелергә өлгөргән яугирға ҡабаттан йәшәүгә сат йәбешеү ҡыйын түгел - күнегеп бөтөлгән.

Төндә йоҡоноң иң татлы сағына тура килтереп күсергә лә, таң атҡас ҡуҙғалырға булдылар. Ул ваҡытта ватыҡ танкының ҡайҙалыр йүнәлеүе ҡапылғара шик уятмаҫ. Үҙҙәре бында тоҙаҡҡа килеп ҡапҡан юлдан барырҙар. Ҡабат миналап өлгөрмәгәндәрҙер, тип өмөтләнергә ҡала, башҡа сара юҡ.

- Ауылдан сыҡҡан урында туҡтатһалар... - һуғыш тураһында совет киноларын күп ҡараған "Мамай" һорай ҡуйҙы. - Исмаһам, берәбеҙ мова белмәй...

- Нишләп? - тине Байсар. - Слава Украини! Һероям слава!

- Мин беләм бер балалар йырын. - "Шырмый"ҙың белмәгәне юҡ. - "Тик-ток"та ҡарағайным. Йыр өйрәткән воспиткалары әй матур ҡыҙыҡай ине.

- Йә...

- "Москалив на ножи! Пора убивати! Пора воевати!" Ҡушымтаһы ғына иҫтә.

- Ошоһо ла етә инде! - "Мамай" "Шырмый"ҙың арҡаһынан һөйөп ҡуйҙы.

Бөтәһенең дә кәйефе күтәрелеп китте: әйтерһең дә инде ҡотолғандар.

- Ә бит был аҡыл, егеттәр! Ауылдан сыҡҡансы шарылдап йырлап барабыҙ, йәнәһе, һаман енеүҙән айнып етмәгән танкистар...

- Абзыйҙы ҡалдырмайбыҙ, - тине Сабир Хөрмәтте уйлап.

"Юҡ", - тимәнеләр.

* * *

–Алтыбыҙ ҙа урынында, - тине "Мамай" рычагҡа тотоноп.

- Аллаға тапшырып тәүәкәлләнек.

Башта бөтәһе лә ыңғай барҙы: ауылдан мажараһыҙ ғына ысҡындылар - хатта йырлашырға ла тура килмәне. Тоҙаҡҡа килеп ҡапҡан юлдан кире киттеләр. Әммә нейтралкаға, айҙағы кратерҙар кеүек аҡтарылған баҫыуға барып еткәс, укр миномёты дөмбәҫләргә тотонды.

Бөтәһе лә теште ҡыҫҡан, күҙҙәр йомоҡ: "Йә Алла! Ҡотҡар, ҡурсала". Окопта атеистар юҡ! Яу яланында һәр кемдең Аллаһы эргәһендә.

Сабирҙы ғына тотоп тыйырлыҡ түгел. Үҙе әйтмешләй, адреналины хатта ҡолаҡтаранан да сәптереп тора, ахыры. Гөмпөлдәп килеп төшкән һайын:

- Не-до-лет! Пере-лет! - тип ҡысҡыра. Француз танкыһының броняһы йоҡа, туп-тура ғына тейһә, бөттө баш. Тәжрибәһеҙлектәнме, "Мамай" тигеҙ генә йөрөтә алмай, урыҡ-нурыҡ, һенкетеп-һенкетеп бара. Әллә шул кәкерсәк-кәкерсәк борғаланып, кратер һымаҡ соҡорҙарҙы уратып-суратып барыу ҡотҡарҙы, имен генә үҙебеҙҙең позицияға яҡынлаштылар.

Сабир:

- Рәхмәт, Макрон! Баҡа ашаусыларға дан! - тип һөрәнләп тә өлгөрҙө, ҡаршынан ут астылар.

- Аҡ сепрәк! Аҡ сепрәк юҡ! - тип сәбәләнде Сабир.

- Көбәкте артҡа ҡаратыу ҙа етә... - тип тыйҙы уны Байсар. - Һин, малай, үтә сосолма. Ҡурҡма, егеттәр абайлар.

Абайланылар, ахыры, атыу туҡтаны. Тик позицияға етерләмәстән танк йөрөмәҫ булды - яғыулыҡ бөттө. Дрондар жыуылдай башлағансы, бер-береһен һөйрәкләшеп сығарып ергә ҡоланылар.

Ысын мөғжизә ине был! Баштар етмәҫлек мөғжизә! Берәйһе яҙып сыҡһа, үәт фәстергән, улай булмай, тип ышанмаҫлыҡ ваҡиға!

Көлдөләрме, иланылармы утты-һыуҙы кискән был яугирҙар. Йәнде ҡармап алған көсөргәнеш тоҙло йәш булып сыҡтымы шулай - байтаҡ тынысланa алманылар.

- Улым ҡыуанyр инде, - тине Байсар "Мамай"ҙы ҡосаҡлап арҡаһына гөп-шап һуғаһуға. - Һинең дә улыңды табабыҙ, туған. Үлем көтөп ултырғанда мин үҙемә нәҙер итеп әйттем. Үҙем, шәхсән үҙем табып, атаһының ҡаһарманлығын аңлатып бирәсәкмен. Һиндәйен аҫыл кеше уҙ улына үҙе тәрбиә бирергә тейеш!

* * *

–Минән башҡа барыһы ла тишек-тошоҡ, бөтәһен дә яҡшылап ямарға кәрәк, - тип йүгерекләне Сабир һәр береһен госпиталгә оҙатҡанда. Мәшәҡәте йәнә ҡубайғайне уның. Инде "Торба" позывнойлы Хөрмәтте ҙур хөрмәт менән ғаиләһенә оҙатырға кәрәк ине: балалары аталары менән ғорурланһын. Ғүмере нисек уҙһа ла уҙған, ә үлеме батырҙарса булды.

Госпиталгә киткән саҡта "Даян" позывнойлы Азамат Сабирға әлеге сумкаһын тотторҙо.

- Һуңғы граната, - тине ул. - Йөрәк тәңгәлендә йөрөт.

- Ярай, абзый, - тине яугир. Арыуы сиктән ашҡан моңһоу ҡарашлы күҙҙәре менән күкте байҡаны: "кошсоҡтар" медиктарҙың "буханка" машиналарын аңдый торған. Ә бер төн эсендә сәстәренә сал төшкән башында: "Һуғышта белеп булмай", - тигән уй үтте. Вәғәҙә биреп булмай.

* * *

Һуғыш дауам итә.

**(Аҙағы. Башы 14-19-сы һандарҙа).**

***✓ Белмәйенсә тороп, башҡаларҙың башын бутау, яңылыштырыу, ысынлап та, оят ғәмәл. Үҙең белмәгәндә яҙып алдашырға, уйҙырма менән уҡыусының башын бутарға ярамай. Бигерәк тә тәбиғәт тураһында ижад иткәндә.***



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ХЫЯНАТЬЫҘ МИЛЛӘТБЕҘ БЕҘ...

**Өс һорауыбыҙҙы Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында йәшәп ижад итеүсе Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, тыуған ерҙең ысын патриоты Иҙрис МӨҘӘРИС-НОҒМАНОВҡа төбәнек.**



**➔ Нимә ул һеҙҙең өсөн тыуған ер, тыуған төйәк?**

- Башҡорт борон-борондан "Гәзиз илкәйемә ҡайтыр ҙа инем, аяҡтарым талһа имгәкләп", тип тиккә генә йырламағандыр. Тыуған ер, тыуған тупраҡ, тыуған төйәк - милләтем кешеһе өсөн барыһы ла ул. Шулай булған, шулай булып ҡаласаҡ. Ожмахҡа тиң Урал тип аталған Ватаны хаҡына башҡорт ир-азаматтары үҙен аямай ҡан ҡойған, баштарын һалған, йәнен фиҙа ҡылған. Ер-һыуына, иленә, төйәгенә шул ҡәҙәре тоғро, хыянатһыҙ милләт башҡа урында юҡтыр ул.

Кем нисектер, әммә үҙем тыуған төйәктән айырылып йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ундайҙарҙы, ғәҙәттә, өйтөбәк тип атайҙар. Мин ана шул өйтөбктәрҙең дә өйтөбәге. Әбйәлилем, Һаҡмарым, Әхмәтем (тыуған ауылым), тип телем асылды, һәр әҫәрем тиерлек улар исеме менән башлана. Сит яҡтарҙа, хатта Европаның үҙәгендә йөрөгән саҡтарҙа ла уларҙы һағынып бөтә инем. Һуңынан ҙурыраҡ, мәртәбәлерәк урындарға эшкә саҡырыуҙар күп булды - Кеше иткән еремде ташлап китә алманым. Ташлап киткән хәлдә, бөгөн Иҙрис Мөҙәрис-Ноғманов тигән яҙыусы булыр инемме, юҡмы, һис әйтә алмайым (мине бит иҫ белгәндән Нөгәмәнов Ринат Мөҙәрис улы тип атайҙар). Әле булһа тыуған ауылым, бергә уйнап үҫкән балаҫаҡ дуҫтарым, йәшел хәтфә урамым, йәйрәп ятҡан урмандарым-ҡырҙарым тип йәшәйем. Һәм ғүмер аҙаҡына шулай дауам итәсәк. Тыуған яғым минең йөрәгемдә. Йөрәгем тибеүҙән туҡтамайынса, уға ҡарата һөйөүем дә һүрелмәҫ. Киреһенсә, миҙгелдәр, йылдар үткән һайын һөйөү хисе көсәйә генә бара һымаҡ. Инде балаларыма, ейәнейәнсәрҙәремә аҡыл өйрәтеп ултырырлыҡ шөйлә ологайған көнөмдә үткәндәргә ҡағылышлы иҫтәлектәр, хәтирәләр яңыра барғандай, улар, әленән-әле дәрт-дарман өҫтәп, йәшәү көсө биреп тора. Бигерәк тә бала сағым тураһында берәй әйбер яҙһам, үҙемде шул мәлдәргә ҡайтып урағандай хис итәм. Һәр әҫәремдә тиерлек уларҙы телгә алырға тырышам.

Бер нәмә үкенесле: мәрхүмә Фәүзиә өләсәйем (атайымдың әсәйе), уҡытыусы атайым мәрхүм Мөҙәрис Хәйривара улы, әсәйем Миндинур Мәғәсәм ҡыҙы яҡын-тирәләге ер-һыу, тау-таш, урман-ҡыр атамалары хаҡында һөйләп ултырырҙар ине, шуларҙы ҡағыҙға теркәп барырға форсат табылмаған (бәләкәй булынғандыр инде). Ә хәтер тигәнең артыҡ күпте һеңдереп булмай, онотола. Мәҫәлән, Һаҡмар йылғаһын башлап ебәргән 15 эреле-ваҡлы инештең хәҙергә көндә икәүһенең генә атамаһы хәтерҙә һаҡланып ҡалған, башҡалары зым-зыя онотолған (Әйткәндәй, ул инештәр бөгөн үҙҙәре лә ҡороп юҡҡа сыҡкан). Мәңгелеккә тиһәң дә хата булмаҫ. Сөнки бөгөн уларҙы иҫләүсе оло быуын кешеләре юҡ.

Йәштәргә кәңәшем шул: өлкән быуын кешеләренән ишеткән-күргәндәрегеҙҙе мотлаҡ ҡағыҙға теркәй барығыҙ. Аҙаҡ бына минең кеүек үкенеп ултырмаҫ өсөн. Теркәгәндәрегеҙ бер бөгөнгөләргә генә түгел, киләсәк быуындар өсөн дә кәрәк буласаҡ. Шул рәүешле тарих тыуа.

**➔ Йәнлектәр темаһына килгәндә, иң тәүге әҫәрегеҙ ниндәй булды, уны яҙырға этәргән сәбәп барҙыр бит?**

- Ҡыр йәнлектәре, ҡош-ҡорттары менән бала саҡтан ҡыҙыҡһындым. Әле башланғыс синыфтарҙа уҡығанда ҡыш етеп, һыуыҡтар башланыу менән, бер кем әйтеп тормаһа ла, тағараҡтар эшләп ҡуя инем. Уларға йыйылған ҡошсоҡтарҙы тәҙрә аша ҡарап ултырырға яраттым. Ҡантүш (ҡыҙылтүш) турғайҙар айырата оҡшай торғайны. Рәсем дәрестәрендә, ирекле темаға мотлаҡ уларҙы төшөрөр булдым һәм гелән "5"ле алдым. Урман ҡоштарынан ҡорҙо, ағуналарҙы "үҙ" иттем. Көрт аҫтынан ҡар борхотоп оҫҡан иҫәпһеҙхисапһыҙ ҡорҙарҙы иҫем китеп ҡарап тора торғайным. Үкенескә күрә, ҡор тигәнең хәҙер һирәк-һаяҡ ҡына күренгеләп ҡалһа, ағуна беҙҙең яҡтарҙа бөтөнләй юҡҡа сыҡты.

Ҡуян ифрат күп булды, тоҙаҡ ҡороп, уларҙы эләктергеләй торғайным. Ошоға бәйле бер ваҡиға һаман иҫтән сыҡмай...

Ул көндө ҡуян һуҡмаҡтары буйлап ниндәйҙер эре кейек йөрөгәйне. Тоҙаҡҡа эләккән ҡуянды яртылаш ашаған, ҡалған тоҙаҡтарҙы өҙгөләп бөткән. Бөтә бәләне төлкө иҫәбенә сығарып ҡуйҙым да уның эҙен юллап киттем. Күп тә үтмәнем, теге ерән ята бит ҡарҙа аунап. Ҡысҡырған булдым, әйләнеп ҡараны ла тештәрен шаҡылдатып ырҗайтты. Ҡулымда таяҡтан башҡа ҡорал юҡ. Ташлана ҡалһа, эш харап. Ташланманы. Теләр-теләмәҫ кенә торҙо ла шырлыҡ араһына инеп китте был. Бик күп ваҡыт үткәс кенә төшөндөм: төлкө тигәнем яңғыҙ бүре булған икән. Шулай итеп, нисектер бәләнән ҡотолдом. Ҡуянды ашап алған йыртҡыс тук булғандыр, тип уйлайым хәҙер.

7-се синыфта уҡығанымда атайым 20-се калибрлы һынар көбәк иҫке генә немец мылтығы бүләк иткәндән аҙаҡ кейектәр мөхите менән ихлас аралашыу башланды. Мылтыҡ тотһам да әҙер ит артынан ҡыуып, үлтереүсе булып йөрөмәнем. Күберәген урман-ҡырҙар гиҙеп, ҡышҡы тәбиғәтте күҙәтеп йөрөр өсөн сыға инем. Һәм ошо күҙәтеүҙәрем тора-бара мауығыуға әйләнде. Йылдар үтеү менән хәтерәмә һеңеп ҡалған хәл-ваҡиғалар хәтирә булып, ҡағыҙ биттәренә төшә торҙо. Шулай итеп, әле уҡыусыларым яратып өлгәргән "Һунарсы яҙмалары" серияһы яҙылды. Яҙмаларымдың бер өлөшө "Әсәйгә бүләк"тә, байтағы "Аждаһа эҙенән" йыйынтығында баҫылды.

Тәүге ҡулъяҙмаларымды шағир Фәрит Хәсәнов кәңәше буйынса, Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған йәш һәм башлап яҙыусылар семинарына тәҡдим иттем. Өҫтәүенә һунлап барҙым. Проза секцияһы етәксеһе, билдәле яҙыусы Сабир ағай Шәрипов уҡып сыҡҡас, балалар ише ҡыуанды. "Бына бит, арабыҙҙа икенсе Василий Песков йөрөгән! Был беҙҙең өсөн ҙур асыш" - тине ул. Семинар етәксеһе Әмир Әминев та йылы һүҙҙәрен әйтте. Был минең өсөн оло мәртәбә ине. Семинарҙың һөҙөмтәһе булып, "Әсәйгә бүләк" китабы донъя күрҙе. Ә бит: "Куй, ыҙалап йөрөмә, барыбер үткәрмәйҙәр унда", - тип кире ҡайырып маташыусылар ҙа табылды. Дөрөҫ, конкуренция көслә, талаптар үтә ҡаты ине. Иллеләп авторҙың 4-һе генә "Китап"ҡа тәҡдим ителеүе тап ошо хаҡта һөйләй. "Тәүәккәлләгән таш ярған" кеүегерәк килеп сыҡты инде. "Әсәйгә бүләк"тең презентацияһына ул саҡтағы Яҙыусылар берлеге рәйесе Р.Т. Бикбаевтың шәхсән үҙе килеүе күп нәмә тураһында һөйләйҙер.

Оло матбуғатта ("Йәншишмә" гәзите) баҫылған иң тәүге әҫәрҙәрем һеүәндән балыҡ сәлдереүсе шөшке - "Әҙертамаҡ" менән яңғыҙын бесән сапҡанда эргәмдә генә йырлап ултырған бүҙәнә - "Сыбарҡай" булды. Әҙертамаҡтың яҙмышы фажиғәле тамамланды (кемдеңдер мурҙаһы эсенә инеп, кире сыға алмайса тонсоҡто). Бала бала инде, шуның өсөн яҡын туғанымды юғалткандай ҡайғырған булдым. Йәнем әсеп иланым.

**➔ Телдең ярлылана барыуы, йәки һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланмауы тураһында ла борсоулы фекерҙәр ишетергә тура килә. Бөгөнгө йәш ижадсыларға ниндәй теләктәрегеҙ бар?**

- Телдең ярлылана барыуы, һүҙҙәрҙе урынлы ҡуллана белмәү тураһында фекерҙәр ишетелеп кенә ҡалмай, ә ысынында шулай. Әбйәлил районының "Йәйгор" әҙәби ойошмаһы етәксеһе булараҡ, быңдай күренеш менән йыш ҡына осрашырға тура килә. Хатта бәгзе бер тел, әҙәбиәт уҡытыусыларының ҡулъяҙмаларына ла төҙәтмәләр индергеләйем. Был бигерәк тә башҡорт телендәге яҙмаларға кәрәккәнкәрәкмәгәнгә урыҫ һүҙҙәре ҡыҫтырып ебәреүгә һәм, айырата, урынһыҙ ҡулланылған тавтологик алымдарға ҡағыла. Мин тел белгесе түгел, әммә ижадыбыҙҙы, телебеҙҙе биҙәмәгән йәмһеҙ, йәнһеҙ һүҙҙәр ауыл хужалығы белгесенә лә ап-асыҡ күренеп тора.

Тағы ла: яҡшылап, ентекләп өйрәнмәйенсә-белмәйенсә, тәбиғәтебеҙ, унда көн күргән кейек-ҡоштар хаҡында яҙып маташыусылар күбәйә бара. Мәҫәлән, "ғаиләһен" һаҡлап йөрөгән ата айыу, ҡыҙыл күҙле ҡуян һ.б. тураһында уҡырға тура килде. Тәүгеһендә ата айыуҙың бар вазифаһы инәһе менән бер тапҡыр ғына осрашыуға ҡайтып ҡалһа (ата айыу үҙенән булмаған көсөктәрҙе тотоп ашауҙан да баш тартмай), икенсеһендә авторҙың йорт ҡуянынан башҡаһын күргәне юҡ икәнлеге ярылып ята. Ә инде билдәле натуралист К.Ф. Йыһаншиндың "Возвращение росомахи" повесын башҡортсаға ауҙарыусының эшен бөтөнләй аңларлыҡ түгел. Шундай матур әҫәр боҙолоп юҡҡа сыҡҡан, тиһәң дә хата булмаҫ. Тәржемәсе хатта росомаханың башҡорт телендә яңғырашын да әйтә алмаған. Диңгеҙ бөркөтөн (орлан-белохвост) башҡортсаға арлан тип ауҙарған, һ.б. Росомаханы бер йыллыҡ мәҙрәсә бөткән өләсәйем ҡоно тип атай торғайны (ҡоно, тимәк ҡомһоҙ, туймаҫ тамаҡ). Камил ағай үҙенең повесының тәржемәһен уҡый алдымы икән, уҡыһа, ни тигәндер инде...

Һанай китһәң, ошолар ише етешһеҙлектәр әҙәбиәтебеҙҙә тулып ята. Уларҙы баҫҡан гәзит-журнал хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлыраҡ, талапсыраҡ булыу кәрәк, тигән фекерҙәмен.

Үрҙәгеләрҙән сығып, йәш һәм башлап ҡәләм тибрәтеүселәргә шул теләктәремде еткергем килә: башыңдағын аҡ ҡағыҙға төшөрөр алдынан нимә, кем тураһында яҙырға теләгәнеңде тәүҙә үҙеңә ныҡлап уйларға, төшөнөргә, белмәгәнеңде һорашырға, белешергә, өйрәнергә кәрәк. Быны бер хилафлығын да күрмәйем. Белмәүҙең ояты юҡ, белергә теләмәү оят, тиҙәр. Хаҡ һүҙҙәр. Ә белмәйенсә тороп, башҡаларҙың башын бутау, яңылыштырыу, ысынлап та, оят ғәмәл. Үҙең белмәгәндә яҙып алдашырға, уйҙырма менән уҡыусының башын бутарға ярамай. Бигерәк тә тәбиғәт тураһында ижад иткәндә. Бушҡамы ни тәбиғәтте өйрәнеүселәрҙе натуралист тиҙәр. Тимәк, был тәңгәлдә уйҙырмаға урын юҡ, яһалмалылыҡ булырға тейеш түгел. Ҡырағай мөхит, унда йәшәгән кейектәр тормошон бик яҡшы өйрәнгән һунарсылар, белгестәр күп бит ул беҙҙә. Мәҫәлән, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы белгестәре. Уларға мөрәжәғәт итергә була. Әҫәрҙәрегеҙҙе яҙғанда иғтибарлы, үҙ үҙегеҙгә талапсан булығыҙ. Аҙаҡ кеше алдында йөҙөгөҙ ҡыҙарып тормаһын өсөн. Бөгөнгө уҡыусы белемле, уҡымышлы, аҙ ғына ялғанды ла (фальшивка) тойоп, тотоп ала. Уҡыусыларыбыҙҙы, проза, шиғриәт һөйөүселәребеҙҙе әҙәбиәттән биҙҙермәйек. Ижади уңыштар һеҙгә!

ИНТЕРНЕТТАН

# ТӘҮҘӘ КӘЙЕФЕҢДЕ КӨЙЛӘ,

## шунан яңы эшкә тотон

■ Ғалимдар белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һөрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Америка ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтары яратыусылар башҡа кешеләр менән сағыштырғанда 2,2 йылға күберәк йәшәй. 16 йыл буйына алып барылған тикшеренеүҙәрҙә 65 йәште үткән 2600 кеше ҡатнаша, табиптар уларҙың йөрәк тамырҙарын даими тикшереп торған һәм омега-3 майлы кислотаһы кимәле юғары булған кешеләр оҙағыраҡ йәшәүен асыҡлаған. Омега-3 майлы кислотаһы майлы балыҡта, диңгеҙ аҙыҡтарында күп һәм йөрәк-ҡан тамырҙары өсөн файҙалы. Балыҡ ашарға яратыусылар араһында йөрәк өйәнәгенән үлеүселәр һаны 35 процентҡа түбәнерәк. Быны өсөн аҙнаһына ике тапҡыр ғына балыҡ ризығы ашау ҙа етә.

■ Дүрт йәшлек ҡыҙҙар күп нәмәне белергә ынтылыусан була һәм белгестәр билдәләүенсә, улар көнөнә 390 һорау бирә икән. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 2 йәштән 10 йәшкә тиклем балалары булған 1000 әсә ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, иң күп һорауҙар биреү буйынса иң "көсөргәнешле" мәл иртән була. Уртаса һәр әсәй көнөнә 12,5 сәғәтлек "мейе штурмы"на дусар була. Һәр 2 минут 36 секунд һайын ул һорауға яуап эҙләү менән баш вата. Социологтар асыҡлауынса, күпселек осраҡта балалар яуап эҙләп атаһына түгел, әсәһенә бара икән. Уларҙың дүрттән бер өлөшө быны атаһының "әсәйеңдән һора" тип яуаплауынан һуң эшләй. Йылына бала яҡынса 105 мең һорау бирә. Йәше ҙурая барған һайын, балаларҙың һорауы кәмей, әммә улар ҡатмарлыраҡ була бара һәм әсәләрҙең 82 проценты уларға яуап бирә алмай. Иң йыш яңғыраған һорауҙарға түбәндәгеләр инә: "Ни өсөн һыу еүеш?", "Күләгәләр нимәнән эшләнгән?", "Күк йөҙө ҡайһы урында тамамлана?" һәм "Һыу аҫтында балыҡ нисек тын ала?".

■ Әгәр ҙә һеҙ аҙнаһына 2-3 тапҡыр әстерхан сәтләүеге ашайһығыҙ икән, икенсе типтағы шәкәр диабеты сире хәүефен кәметәһегеҙ. Был турала Бостондағы йәмәғәт сәләмәтлеге Гарвард мәктәбе хеҙмәткәрҙәре белдерә. Ғалимдар был сәтләүектең диабетҡа ҡаршы тәьҫирен күптән асыҡлаған булһа ла, был тикшеренеүҙәр һуңғы осорҙа иң эре асыш тип иҫәпләнә. Бынан тыш, әстерхан сәтләүеге онкологик сирҙәр үҫешен дә булдырмай.

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР

(Башы 1-се биттә).

Пленар ултырышта социаль проекттар инициаторҙары "Атайсал" проектында ҡатнашыуҙары тураһында үҙҙәре телмәр тотто. Мәҫәлән, Күмертауҙың "Аҡ йылға" ирекмәндәр үҙәге етәксеһе Марина Сафонова урындағы халыҡтың Ватанды һаҡлаусыларға ярҙам итеүҙәге мөһим ролен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Үҙәк активистары һаҡ селтәрҙәре бәйләй, маскировка костюмдары тегә, окоп шәмдәре эшләй. Яугирҙарға ярҙам итеүҙә балалар һәм ололар ҡатнаша. "Туғандарыбыҙға һәм яҡындарыбыҙға ярҙам итеү - ҙур маҡсат. Беҙ яугирҙарҙы хәстәрлек, йылылыҡ һәм мөхәббәт менән уратып алыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләйбеҙ. "Атайсал" проекты ярҙамында Башҡортостан ҡалаларында һәм ауылдарында яугирҙарға ярҙам итеүсе ысын халыҡ батальонда-ры булдырылды", - тине Марина Сафонова.

Рәсәй Федераль наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу хеҙмәте директорының элекке урынбаҫары, полиция генерал-полковнигы ***Михаил Кийко*** бөгөн "Аэромакс" предприятиеһын етәкләй. Меценат тыуған Стәрлетамаҡ районында Бөйөк Ватан һуғышы һалдаттарына мемориал төҙөргә, Советтар Союзы Геройы Яков Ткаченкоға бюст ҡуйырға, Золотоношка ауылында хәрби хәрәкәттәр ветерандары хөрмәтенә сиркәү һәм часовня төҙөргә ярҙам итә. "Олатайым Стәрлетамаҡ районында тыуып үҫкән, Ул Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт иткән, шунан һуң тыуған яғына ҡайтҡан. Стәрлетамаҡта йәшәгәндә ул йыш ҡына тыуған ауылынан яҡташтарына килеп ярҙам иткән, - тип һөйләне Михаил Кийко. - Уның өлгөһө мине республика тормошонда ҡатнашырға мәжбүр итә. Был Башҡортостанға рәхмәт тойғоһо, ул минең ға-



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**Форум сиктәрендә бихисап тематик майҙансыҡтар эшләне, ҡатнашыусылар тәжрибә уртаҡлашты. "Ғаилә ҡиммәттәре. Беҙ - Атайсалдың усағын, йолаларын, именлеген һаҡлаусылар" тип аталған түңәрәк ҡорҙа Башҡортостандың "Ағинәй" һәм "Ир-егеттәр советы" йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре көнүҙәк проблемалар буйынса фекер алышты. Һүҙ - уларға:**

***Гөлфиә ЯНБАЕВА, Башҡортостан Республикаһы "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Атайсал" форумының "Ғаилә ҡиммәттәре: беҙ - Атайсалдың усағын, йолаларын, именлеген һаҡлаусылар" секцияһы модераторы:*** Беҙҙең секция республикала әүҙем эшләп килгән "Ағинәй" һәм "Ир-егеттәр советы" йәмәғәт ойошмалары етәкселәрен бер ҡорға туплаНы. Маҡсат шулай: "Беҙ - айыҡбыҙ, иманлыбыҙ, кәсеплебеҙ; беҙ - атайсалыбыҙҙың ҡотон, рухын, усағын һаҡлаусылар", - тигән изге ниәтте девизыбыҙға әйләндереү. "Атайсал" форумдарында "Ауылдарыбыҙҙы, рухыбыҙҙы кем ҡотҡарыр?" тигән һорау ҡат-ҡат ҡабатлана. Төп яуап: "Ауылдарға ябырылған бар һынауҙарҙы ошо ауылдарҙа йәшәгәндәр, ошо ауылдарҙа тыуып-үҫкәндәр үҙҙәре еңеп сығырға тейеш", - булды. "Күреһегеҙ, килөсәктә тыуған ауылдарына ябырылып ҡайтасаҡтар әле яҡташтар. "Атайсал" проекты ла бына ошоға булышлыҡ итә бит", - тип тә ҡабатланы бөгөн ауылдар йәшәһен, унда йәшәгәндәрҙең дәрте һүрелмәһен тип, төрлө әмәләр, саралар ойошторол, фермерлыҡ, меценатлыҡ, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән ағинәйҙәр һәм ир-егеттәр. Был маҡсатҡа, әлбиттә, баяғы "Беҙ - айыҡбыҙ, иманлыбыҙ, кәсеплебеҙ..." тигән девизды һанлағандар һына өлгәшә ала. Үҙебеҙҙең был осрашыуҙа ла шул турала - халыҡтың тәрбиә мәктәбен, йолаларҙы тергеҙеү, ауылдаштарҙы, райондаштарҙы, яҡташтарҙы ошо изге эштәргә әйҙәү, йәләп итеү тураһында һөйләштек. Республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Таһир улы: "Доньялар тыныс булмаған осорҙа һеҙҙең - атайсалын ҡәҙер итеп, һаҡлап йәшәгән ағинәйҙәрҙең, аҡһаҡалдарҙың, барлыҡ энтузиастарҙың төплө, хаҡ һүҙҙәре йәмғиәткә бик тә кәрәк. Аҡыл-кәңәштәрегеҙҙе барыһына ла еткерегеҙ", - тигәйне. Эйе, иң изге ғәмәл - ул атайсалыбыҙға, тыуған төйәгебеҙгә, туған телебеҙгә тоғролоҡ икәнен һәр кемгә аңлатаһы бар әле...

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостандың "Ир-егеттәр советы" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:*** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлеге ваҡытта йәштәр ғаилә ҡорорға һәм балалар тыуҙырырға ынтылмай. Бер-ике бала гәҙәти хәлгә әүерелде, ғаиләләрҙең яртыһы тиерлек тарҡала. Осрашыуҙа Башҡортостандың "Ир-егеттәр советы" һәм "Ағинәй" йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре әлеге хәлдә төҙәтеү, балаларҙы ата-бабаларыбыҙ йолаларында тәрбиәләү өсөн саралар күреү буйынса фекер алышты. Ғаиләлә кәм тигәндә өс бала үҫтереү, туған телдә, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, сәләмәт йәшәү рәүешен өйрәтеү кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Дәүләт органдарының ғына түгел, йәмәғәт ойошмаларының, тәү сиратта, дин әһелдәренең эшен әүҙемләштереү зарур. Бөгөн уларҙың алкоголь эскән йәки наркотик ҡулланған кешеләр менән һөйләшеүен һирәк күрергә мөмкин. Шулай уҡ айырылышыу сигендә булған йәш парҙарға ярҙам итмәйҙәр. Ғаиләләрҙе һаҡлау буйынса дин яғынан маҡсатлы эш алып барылырға тейеш.

Һәр беребеҙҙең тыуған һәм тәүге тапҡыр тәпәй баҫҡан урыны - сәңгелдәге, кескәй Ватаны бар. Был урында атай-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ ғүмер иткән, һуңғы төйәктәре лә шунда. Һәр беребеҙ Атайсалыбыҙға ярҙам итергә бурыслы. Күп кенә ауылдарҙа ата-әсәләрҙең (өләсәйҙәрҙең, олатайҙарҙың) йорттары бар. Ҡасандыр һеҙҙең атайлы-әсәйле, бәхетле мәлдәрегеҙҙең шаһиты булған йорт әле буш тора, яйлап емерелә бара. Минең фекеремсә, уны һатырға кәрәкмәй, сөнки һеҙ уны төҙөгән, ығынаҙландырған атай-әсәйегеҙҙең яҡты иҫтәлеген дә һатаһығыҙ. Йорт-ҡураны йүнәтергә, ҡойма-ихаталарын яңыртырға кәрәк. Был тыуған ерегеҙгә рәхмәтле булыуығыҙҙы сағылдырыр һәм, әлбиттә, тыуған ауылығыҙға йәм бирер, ҡот ҡундырыр. Һеҙҙең өлгөгөҙгә башҡалар ҙа эйәрер.

***Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, район мәҙәниәт йортоноң халыҡ ижады буйынса методисы:*** Ошондай мәртәбәле сарала өсөнсө йыл рәттән ҡатнашам, күҙәтеүҙәрем буйынса ауыл тормошон йәмләгән яңынан-яңы проекттар барлыҡҡа килә. Көнүҙәк мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү, уртаҡ фекер төйнәгән күркәм сарала республикала бик әүҙем эшләгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы менән "Ир-егеттәр советы"ның бер ҡорҙа фекер алышыуы тәрән мәғәнәгә эйә, урынлы һәм фәһемле, тип уйлайым. Был юлы, мәҫәлән, Хәйҙәр ағай Тапаҡовтың ир-егеттәрҙең ғаиләлә, мәктәптә, уҡытыусылар араһында абруйын үҫтереү буйынса тәҡдиме оҡшаны. Үҙем бәләкәйҙән атайһыҙ үҫтем. Ауыҙ тултырып "атай" тип әйткәнем булманы, атайлыларға күҙем ҡыҙҙы. Кескәйҙән үҙемде яҡларға өйрәндем. Әрһеҙ. эшкә сыныфып үҫкән ҡыҙ балараҡ, кейәүгә сыҡҡас та шул холҡомдо ташламаным: ирем Ринат менән бер рәттән бесәнен дә саптым, утынын да быстым, кәрәк икән, мотоциклда ла йөрөнөм. Ғаиләлә лидер

иләм өсөн артабанғы үҫештең нигеҙе булды".

Силәбе өлкәһенең Солтан ауылында тыуып үҫкән ***Камил Хәйруллин*** "Солтан - бында ауылды тергеҙәләр" проектын башлап ебәрҙе. Инвестор тораҡ пунктта яңы йорттар төҙөй, уларҙы урындағы халыҡҡа бушлай ҡуртымға тапшыра. "50 йыл тиерлек Санкт-Петербургта йәшәйем. Әммә бала сағымды һәм йәшлегемде мин Солтан ауылында үткәрҙем, унда атай-олатайҙарым XIX быуаттан алып йәшәгән. Ауылды һаҡлап ҡалыу өсөн мин эш планын төҙөнөм. Торлаҡ йорттар һәм сыр ҡайнатыу заводын төҙөп, бушлай ҡуртымға бирҙем, урындағы ауыл хужалығы етештереүселәренә ярҙам итәм. Был яңы эш урындары булдырырға, мәктәпте һәм ғаиләләр өсөн балалар баҡсаһын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирҙе. Хәҙер өлкә властары менән асфальт юл төҙөлөшөн тикшерәм, унда ла ҡатнашырға әҙермен, - тине Камил Хәйруллин. - Башҡортостанда уникаль "Атайсал" проектын башлап ебәреүҙәре һәм үҙҙәренең кесе Ватаны хаҡында хәстәрлек күрергә әҙер булғандарға ярҙам итеүҙәре ҡыуаныслы".

"Фармленд" федераль дарыуханалар селтәренә нигеҙ һалыусы ***Олег Муров*** бизнестың һәм йәмғиәттең төбәкте үҫтереү өсөн шәхси яуаплылығы темаһына ҡағылды."Мин тыуған ерҙе яратыусылар ғына түгел, уны яҡшыртыусылар тураһында ла һөйләйем, - тип мөрәжәғәт итте ул форумда ҡатнашыусыларға. - Беҙ, мәҫәлән, меңдән ашыу бинаның фасадын ремонтланыҡ, урамдарҙы төҙөкләндерҙек. Беҙҙә 11 мең хеҙмәткәр, уларҙың күбеһе Башҡортостанда эшләй һәм лайыҡлы эш хаҡы ала. Беҙ бында һалым түләйбеҙ - был республика үҫешенә ҙур өлөш индерә". Олег Муров, Тыуған илгә һөйөү тураһында һөйләү генә түгел, ә көн һайын уны ғәмәлдәр менән раҫлау мөһим, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Башҡортостанды алыҫтан да яратырға мөмкин, - тип билдәләне бизнесмен. - Ләкин республиканы үҫтереү, балаларыбыҙҙың бында уҡырға һәм эшләргә теләүе өсөн шарттар булдырыу күпкә мөһимерәк. Әгәр кеше иртәгә бөгөнгөгә ҡарағанда яҡшыраҡ буласағын тойһа, ул бынан китмәйәсәк. Башҡортостанда йәшәү абруйлы булһын өсөн эшләргә тейешбеҙ".

Өфө дәүләт нефть техник университетының Евразия политехник мәктәбе студенты, химия буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа дүрт тапҡыр еңеүсе ***Вадим Харисов*** олимпиада хәрәкәтендә ҡатнашыу тәжрибәһе менән уртаҡлашты һәм ни өсөн тыуған төбәгендә юғары белем алыуы хаҡында һөйләне. "Бөтә донъя конкурсында сәхнәгә алтын миҙал алырға сыҡҡанда быға Башҡортостанда өлгәшеүем менән ғорурландым", - тине Вадим Харисов. Ул мәктәпте тамамлағандан һуң Өфөлә ҡалырға һәм мәктәп уҡыусыларын олимпиадаларға әҙерләүгә бағышларға ҡарар итеүен билдәләне. "Башҡортостандың төрлө райондарынан килгән балалар менән эшләү минең өсөн иң ҙур мотивация булып тора. Мин уларҙа ҙур потенциал күрәм, - тип һөйләне ул. - Һәр уҡыусының үҙен табып, тыуған еренән китмәйенсә уңышҡа өлгәшә алыуын теләйем..." Вадим Харисов йәштәр өсөн мөмкинлектәр булдырыуҙың мөһимлеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Беҙ бында ла көслө белгес, уҡытыусы, ғалим булыу мөмкинлеген күрһәтергә тейешбеҙ. Кемдер: "Өфөлә ни эшләргә мөмкин һуң?" - тиһә, мин: "Беҙгә ҡара, беҙ бында ҡалдыҡ һәм уңышҡа өлгәштек", - тип яуап бирә алам", - тип уртаҡлашты Вадим Харисов.

**Шулай итеп...**

"Дүрт йыл элек "Атайсал" проектын башлағанда беҙ был тиклем уңыштар, атҡарыласаҡ эштәр тураһында күҙ алдына ла килтермәгәйнек әле", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев. Ысынлап та, яҡташлыҡ көсө менән атҡарылған "Атайсал" проекттары бихисап булып китте. Бер-беребеҙгә ярҙам итеү, кәрәк саҡта иңеңде ҡуя белеү, терәк-таяныс булыу - халҡыбыҙҙың иң матур ғәҙәттәренең береһе. Шул йоланы яңыртыуға, дауам итеүгә булышлыҡ итте "Атайсал" проекты. Асылыбыҙҙағы аҫыл сифатыбыҙҙың милли идеология кимәленә күтәрелеүен халыҡ та ҡуш ҡуллап күтәреп алды. Тыуған Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр ғәҙәти күренешкә әйләнде. Халыҡтың бөгөн изге эштәргә берләшеүе бигерәк тә Махсус хәрбиә операция майҙандарында ил именлеген һаҡлаусы уландарыбыҙ, ир-егеттәребеҙҙең ауыр хеҙмәтенә ярҙам итеү юҫығында алып барыла. Был юлы ла форумда ҡатнашыусылар төрлө секцияларға бүленеп эшләһә лә, төп һүҙ барыбер ана шул берҙәмлек емештәрен барлауға арналды. Изгелектең иң олоһо ошо булалыр ҙа инде. Девизы "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" тип нарыҡланған проект уйлыларҙы, ғәмлеләрҙе, сәмлеләрҙе бергә туплай. Көсөбөҙ - республикабыҙҙың матур киләсәге хаҡына эшләнгән һәм эшләнәсәк изге ғәмәлдәребеҙҙә.

булдым. Бөгөнгө күҙлектән үҙемә баҡһам, ошондай һыҙаттарым артығыраҡ булған тип иҫәпләйем, сөнки ир-егет һаҡлаусы, ҡурсалаусы, ғаиләнең ҡалҡаны булып торорға тейеш. Ирем бөтмөр, егәрле, улдарыбыҙҙы бәләкәйҙән эшкә өйрәтте, матур тәрбиә бирә.

Түңәрәк ҡор барышында ир-егеттәр тарафынан "Ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы" тигән фекер яңғыраны. Эйе, быға тиклем гүзәл затты шулай тип атанылар. Әммә тормошобоҙ үҙгәрә, бөгөн һынауҙар, үҙгәрештәр алдында торабыҙ. Мин ир-егеттәрҙе донъя тотҡаһы, тип әйтер инем. Был бөгөнгө көн талабы ла: "Ир-аттарҙың һүҙҙәре һәр саҡ хаҡ, өҫтөн булһын!" Аллаға шөкөр, ауылдарҙа ир-егеттәр һәм аҡһаҡалдар бер ҡорға берләшә. Беҙҙең Хәйбулла районы Федоровка ауылы башланғысында, мәҫәлән, "Таяныс" клубы эшләп китте. Хәйбулла районы башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән 35 йәштән өлкән буйҙаҡ егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы берләштергән "Тип, йөрәгем" тип аталған проект уңышлы тормошҡа ашырыла. Киләсәктә хатта күрше-тирә райондарҙың буйҙаҡтары менән осрашыуҙар үткәрергә ниәтләнәләр. Йәмғиәтебеҙгә биҙәк булырҙай күркәм-күркәм ғаиләләр барлыҡҡа килер, һау-сәләмәт балалар тыуыр, тип ышанабыҙ.

Бөгөн "Ағинәйҙәр нимә эшләй?" тип түгел, ә "Улар нимә эшләмәй?" тип һорау дөрөҫөрәк булыр. Сөнки уларҙың башҡармаған, ҡатнашмаған, өлгөрмәгән эше юҡ. Бар сараларҙың уртаһында ҡайнайбыҙ, һәр ваҡыт алданбыҙ. Хәрәкәт дауам итәсәк. Юлдар һалынды, эштәр аныҡ билдәләнгән. Республика " Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева, әйтерһең дә, бөгөнгө көндәрҙе тойомлап булдырғандыр был ойошманы, тигән уй барлыҡҡа килә.

***Ринат ХӨСӘЙЕНОВ, Стәрлебаш районының "Ир-егеттәр советы" ойошмаһы рәйесе, алты бала атаһы, районның М.Шайморатов исемендәге Ирекмәндәр штабы етәксеһе:*** Һәр ғаилә башлығының бурысы - нәҫел ебен һаҡлау, ата-бабалар аманатын түкмәй-сәсмәй йәш быуынға тапшырыу, йолаларҙы тергеҙеү һәм ир балаларға рух-ҡот ҡундырыу. Дүрт малай атаһы булараҡ, һәр ваҡыт үҙемә "Дөрөҫ юлдан бараммы?" тигән һорау бирәм. Уландарыма әйткән һүҙҙәрем һәм ғәмәлдәрем тураһында йыш уйланам. Ошондай сараларҙа илһамланам, борсоған мәсьәләләргә яуап табам. Ирекмән булараҡ, МХО яугирҙары менән күп күрешәм һәм аралашам. Илебеҙ һағында тороусылар яҡындары һәм балалары хаҡында борсола. Уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү минең бурысыма әүерелде. Атайһыҙ ҡалған балаларға тәрбиә биреү һәм йөрәктәрендәге бушлыҡты тултырыу өҫтөндә лә эшләйем. Бөгөнгө ҡорҙа яңғыраған фекерҙәр миңә көс-ҡеүәт өҫтәне, үҙемә яңы маҡсаттар ҡуйҙым. Бөгөнгө һөйләшеүҙәр берҙәмлектең, бер йүнәлештә эшләүҙең мөһимлеген билдәләне.

***Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА. Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы һәм "Кәрәҙ" халыҡ ҡорамасылар клубы етәксеһе:*** Форумдан дәртләнеп, кәйефтәр күтәрелеп, рухланып ҡайттыҡ. Районыбыҙҙың ағинәйҙәре өс йүнәлеш буйынса эшләй. 2014 йылда район мәҙәниәт йортонда ойошторолған "Кәрәҙ" клубы үҙенең эшмәкәрлеген башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының этник мәҙәниәтен, рухи традицияларын, халыҡ педагогикаһының иң яҡшы өлгөләрен тергеҙеү, һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт ҡатын-ҡыҙының йәмғиәттәге һәм дәүләттәге социаль статусын күтәреү, уның заман талаптарына ярашлы шөғөлөнә булышлыҡ итеү, башҡорт ғаиләһен нығытыу буйынса йәмәғәт эшмәкәрлеген әүҙемләштереү маҡсатында ойошторолған "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының Уставына ярашлы эш алып бара. "Халыҡ коллективы" исемен яулаған ҡорамасылар клубы районның һәр ауылындағы оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙарҙы берләштерә. Район һәм республика кимәлендәге мәртәбәле саралар биҙәге ул Бөрйән ҡорамасылары. "Кәрәҙ"селәр Республика халыҡ ижады үҙәгендә йыл һайын үткәрелә килгән "Ҡораматуй" фестивалендә даими ҡатнаша һәм дипломдар яулай.

Шулай уҡ беҙҙең ағинәйҙәрҙең "Сергетыш" проекты Башҡортостан кимәлендә танылыу яуланы. Райондың Күҙәмбәт яланында йыл һайын үткәрелгән Ҡышҡы ат ярыштары байрамында сергетыштарыбыҙ менән аттарҙы һәм һабантуй яланындағы тирмәләрҙе биҙәүгә башлыса беҙ йәлеп ителәбеҙ.

Беҙҙең фәлсәфәүи мәғәнә һалынған мираҫ булған "Шаршау" проекты уңышлы эш башланы. Ни өсөн фәлсәфәүи? Башҡорт ғаиләһендә әҙәм балаһы шаршау артында донъяға килгән, сабый сағында ят күҙҙәрҙән сәңгелдәктә ҡорған аҫтында һаҡланған, кейәү менән кәләш ҡорона ингәс, сымылдыҡ артында ҡушылған, ҡартайып кәре киткәндә ҡорған артында көн күргән, һуңғы төйәгенә күскәндә лә шаршауҙың кәрәге тейгән. Бик мөһим һәм иң кәрәкле ҡаралты ул беҙҙең халыҡта шаршау. Ана шул сигеүле-ҡайыулы, биҙәкле шаршауҙарҙы ҡайтарабыҙ әле беҙ көнитмешебеҙгә.

Район ағинәйҙәре, йәштәрҙән ҡалышмай, яугирҙарға ярҙам итә. Әммә алдан уҡ шулай тип һөйләшеп ҡуйҙыҡ: һәр кем күңел талабы менән ошо изге эште алып бара, ләкин был хаҡта ҡысҡырып йөрөмәй. Һаҡ селтәрҙәре, йөн ойоҡбаштар һәм башҡа кәрәк-яраҡтар изге фатихаларыбыҙ менән егеттәребеҙгә оҙатыла. Үҙебеҙҙең йәшебеҙгә күрә, бер аяғыбыҙ йәмәғәт эштәрендә булһа, икенсеһе - мәсет һуҡмағында. Ағинәйҙәрҙең төп эше, минеңсә, доғала булыу, Ҡөрьән уҡыу, илйорт именлеге өсөн тәҡбир әйтеү. Яуҙағы егеттәребеҙ имен-һау ҡайтһын өсөн теләктәр теләйбеҙ.

**Гүзәл БИКМӘТОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ алтынсы хат: "Сит илдәр тәбиғәте"

Әрмәнстан тәбиғәтенән алған тәьҫораттар мине уның пейзаждары тураһында ла ентекләберәк һөйләргә этәрә. Әрмәнстандың күп быуатлыҡ мәҙәниәте хатта тауҙарҙы ла еңгән. "Быуаттар әйлән-бәйләне, - тип яҙа Андрей Белый "Кавказдан иҫкән елдәр"ҙә, - ҡомартҡылар тупраҡҡа һеңгән; һәм тәбиғи таштар ҙа - скульптураны уҙҙырып туҙған, таш һындар ҙа ярылып, ергә һеңеп, ҡыуаҡтарҙы күтәрә; нимәгә ҡарап тороуыңды ла төшөнөп етә алмайһың: тәбиғәттеме, мәҙәниәттеме? Алыҫта Севанды бүлгән Гегаркуник башында алһыуыраҡ, һарғылт-аҡһыл һәм ҡырлы бәләкәй һырт күтәрелә; тупраҡ унда ҡорамдар менән ҡалҡып сыҡҡан, ҡорамдар - бөтәү ҡая киҫәктәре".

Был Белыйҙың үткен генә тәьҫораты түгеллеген әрмән рәссамы Мартирос Сарьяндың да ауаздаш булыуы дәлилләй, ә нәҡ шундай рәссамдың һүҙенән дә абруйлыраҡ нимә булыуы мөмкин? "Әрмәнстан" очеркынан тәьҫоратланып, Белыйға яҙған хатында Сарьян уларҙың бергә "күкһел-шәмәхә төҫөндәге өҫтө-өҫтөнә өйөлгән, Арарат һәм Арагац тауҙарының иң бейек түбәһе булып үрә торған таштарға һоҡланып, ошо көйгән-асыҡ таулы ил буйлап ултырып йәки йәйәү йөрөгән" көндәре тураһында иҫтәлектәр һаҡлауы тураһында яҙа.

Мин Сарьянды төҙәтергә ҡыймайым, шулай ҙа миңә Көнсығыш Әрмәнстан пейзажы Сарьяндың картиналарындағына ҡарағанда ҡырыҫыраҡ тойола. Ямғырҙар, шишмәләр һәм виноград баҡсалары йырындар һалған яланғас тауҙар, таштары тәгәрәп төшкән тауҙар, ҡуйы тығыҙ төҫтәр: был, ысынлап та, үҙенә халыҡ ҡанын һеңдергән тәбиғәт. Үрҙә мин крәҫтиән тарафынан йәнләндерелгән урыҫ тәбиғәтенә һөрөлгән ер ритмы, ҡоймалар һәм ағас диуарҙар ритмы хас, тип яҙғайным. Әрмәнстан пейзаждарына ла хас ритм бар, әммә ул икенсе төрлө. Сарьяндың "Ер" тигән картинаһы (1969) бик тәьҫирләндерә. Ул тотошлайы менә һыҙаттарҙан тора, әммә сағыу, тулҡын кеүек һыҙаттарҙан - Рәсәй кешеһе тыуҙырған ритмдарҙан бөтөнләй башҡа.

Ошо уҡ тулҡынға оҡшаш ритм бик шәп әрмән рәссамы Минас Аветисян картиналарында тотоп алынған. Уның "Атай-әсәй" картинаһында (1962) атай һәм әсәй әрмән пейзажы фонында һүрәтләнгән. Шуныһы ғәжәйеп, әрмән тәбиғәтенең ритмы кешеләрҙең күңелендәге ритмда ҡабатлана кеүек. "Атай-әсәй" картинаһында хатта тауҙар ҙа хеҙмәт ритмы тулҡындарына әүерелгән.

Әрмәнстандың хеҙмәт ритмдары, уның халҡының хеҙмәте кеүек үк, иҫ киткес күп төрлө. Сарьяндың "Төшкө тынлыҡ" картинаһында (1924) ергә киптерергә йәйелгән балаҫтар кеүек, эшкәртелгән баҫыуҙарҙың шаҡмаҡтары төшкәнме ни. Тауҙар һәм баҫыуҙар ритмы тура ла килә, бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ла кеүек. Кождояндың "Арарат туғайы" картинаһында ритм ирекле һәм еңел. Унда тауҙар - тулҡындар, үҙән һыҙаттары - ни бары диңгеҙ өҫтөндәге еңел шаҙра.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 26 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Премьера. "Время героев". [16+]
13.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая. Золотой век". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Васнецова". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.15, 17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.15 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 3.30 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Легенды Урала. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**1.45 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 27 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Васнецова". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Из жизни доктора. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Экологично. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 3.30 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Последняя высота". [12+]**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**1.30 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**

### 28 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Васнецова". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**10.45 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байык-2025. [12+]**
**1.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**3.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 29 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.25, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Васнецова". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Үткән гүмер. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "Красноармеец Якупов". [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.30 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**3.30 Автограф. [12+]**

### 30 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40 "АнтиФейк". [16+]
11.10, 12.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Премьера. "Наша новая музыка". [12+]
0.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Дама с собачкой". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.30 "Истории Большой Страны". [12+]
0.30 Х/ф "Она сбила лётчика". [12+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 17.45, 19.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Династия чести. [12+]**
**20.45 Башҡорт йыры. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15, 3.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Китап-байрам. [12+]**
**23.15 Ете егет. [12+]**
**0.15 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.15 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**4.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

### 31 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Вспомнить всё". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Убойная сила". К 25-летию сериала. [16+]
16.00 К 70-летию музыканта. Концерт Владимира Кузьмина. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". [16+]
23.50 Х/ф "Корсаж". [18+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Отдам маму замуж". [16+]
0.45 Х/ф "Мои дорогие". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00, 23.15 Китап-байрам. [12+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Зерно. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Асыш. [6+]**
**11.30 Лит-ра. [6+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 18.15, 19.00 Интервью. [12+]**
**17.15 Все песни о прекрасном. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байык-2025. [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 3.00 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Башҡорт йыры. [12+]**
**0.45 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**3.45 Спектакль "Счастье". [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 1 ИЮНЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Крокодил Гена, кот Матроскин, Винни-Пух... Мультики нашего детства". [0+]
13.20 "Видели видео?" [0+]
14.25 Х/ф "Обыкновенное чудо". К 70-летию Евгении Симоновой. [12+]
17.05 Д/ф Премьера. "Её звали Джипси". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Кубок Первого канала по волейболу-2025. Сборная России - сборная Сербии. Мужчины. Трансляция из Сербии.
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.10, 1.35 Х/ф "Продаётся Ҡошка". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.00 "Наши. Военкоры". [12+]
12.40 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина". Ко Дню защиты детей.
15.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.30 Большой концерт ко Дню защиты детей.
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 18.30 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.00, 22.45 Китап-байрам. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Интервью. [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 Асыш. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15 Х/ф "Колонкай". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Победа в наших сердцах. [6+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.45 Из жизни доктора. [12+]**
**19.15, 4.00 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Х/ф "Номер один". [12+]**
**0.45 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Май - Июнь (Зөлҡәғиҙә - Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (28) дүшәмбе | 2:47 | 4:53 | 13:30 | 18:49 | 21:34 | 23:04 |
| 27 (29) шишәмбе | 2:47 | 4:52 | 13:30 | 18:50 | 21:36 | 23:06 |
| 28 (1) шаршамбы | 2:46 | 4:51 | 13:30 | 18:51 | 21:37 | 23:07 |
| 29 (2) кесе йома | 2:46 | 4:49 | 13:30 | 18:52 | 21:38 | 23:08 |
| 30 (3) йома | 2:45 | 4:48 | 13:30 | 18:52 | 21:40 | 23:10 |
| 31 (4) шәмбе | 2:44 | 4:47 | 13:30 | 18:53 | 21:41 | 23:11 |
| 1 (5) йәкшәмбе | 2:44 | 4:46 | 13:30 | 18:54 | 21:42 | 23:12 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 20 МАЙ - БӨТӨН ДОНЪЯ БАЛ ҠОРТТАРЫ КӨНӨ

**Бал! Хуш еҫле, татлы, шифалы тәбиғәт мөғжизәһе, Аллаһы Тәғәләнең әҙәм балаһына инселәгән серле лә, илаһи ҙа, әйтеп аңлатҡыһыҙ ҡатмарлы ла, һоҡланғыс һәм аҡыллы ла ысул менән табыла торған бүләге, бәрәкәте, дауаһы.**



Тарихсылар раҫлауынса, бал кешегә палеолит осоронан алып билдәле булған. Көнсығыш Испаниялағы мәмерйә диуарында бал йыйыусы кеше һүрәте табылған, имеш. Боронғо Урта диңгеҙ буйҙарында ла ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр. Ләкин ҡайҙа ғына булмаһын, донъяла иң тәмлеһе, шифалыһы, әлбиттә, башҡорт балы, уның даны бөтөн донъяны яулаха. Башҡорттарҙа ҡортсолоҡ, айырыуса уның солоҡсолоҡ тармағы борон-борондан быуындан-быуынға тапшырыла килгән ҡатмарлы, ләкин айырым таҫыллыҡ талап итеүсе маҡтаулы шөғөл. Халыҡ-ара күргәҙмәлә ҡатнашып, башҡорт балы 1900 йылда уҡ әле Алтын миҙал яулаған! Бөгөн Башҡортостанда ҡортсолоҡ йылдам үҫешә һәм төрлө күргәҙмә-фестивалдәрҙә алдынғылыҡты бирмәй, даими рәүештә алтын миҙалдар яулай. Бынан тыш, башҡорт балы сит илдәрҙә ҙур һорау менән файҙалана. Былтыр ғына әле сит тарафтарға 111 тонанан ашыу татлы ризыҡ оҙатылған, экспорт күләме 130 тоннанан артып китә. Сит илдәрҙә солоҡ балының төмән, сифатын беләләр, шуға күрә был продукцияға айырыуса ихтыяж ҙур.




1 Солоҡ ағасы

2 Ҡортсолоҡтоң боронғо тармағы

3 Бал ҡортоноң "коралы"

4 "Йыямын да - йәнле ынйыларҙан Хуш еҫле бер ... ҡоямын" (Рәми Ғарипов, "Туған тел")

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**19-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Буранбай. Башҡортостан. Таянма. Барын. Балта. Ҡәҙерле. Сытыр. Етеһендә. Саңғы. Нурбостан. Ҡайта. Егетлеге. Ала. Күрк. Кәрнизле. Йырларһың. Артыҡ. Андыҙлыҡ. Бөләр. Етен. Тетрәр. Еткерер. Тартыр. Һөйгән. Атабыҙ. Егет. Лиссабон. Икеле. Алалар. Нектар. Етегән. Лион.

**Вертикаль буйынса:** Атай. Ҡурҡалар. Тай. Аватар. Енсек. Ерен. Бута. Рябы. Беснәк. Ҡан. Ереккәнде. Аҡын. Рәтле. Аласыҡ. Рота. Аран. Барт. Атайсал. Арал. Батырҙар. Ромб. Нәҫеле. Касса. Нарзан. Гүйә. Натура. Раунд. Һатҡан. Ышанма. Илһеҙ. Егез. Лапылы. Етмеше. Ҡаҙыҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 май "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**29 май "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 май "Башҡорт туйы"** (М. Бурангулов, А. Йыһаншин), романтик драма. 6+
**24 май "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А.Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 6+
**25 май "Две Бабы-яги"** (М. Күлбаев), әкиәт. 0+
**27 май "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+
**29 май "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хәкимов), фэнтези. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 һәм 28 май "Урал Батыр эҙҙәре буйлап"**, интерактив квест. 12:00. 6+
**24 май "Терем-теремок"** (Д.Гараева, В.Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+
**25 май "Винни-Пух"** ( А.Мили). 12 һәм 15:00. 6+
**29 май "Чем пахнут одуванчики"** (В.Щербакова). 15:00. 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 май "Глубокое отражение"**. ("НитьЯ" театры), әкиәти драма. 12+
**24 май "Исполняя мечты"**. ("НитьЯ" театры), комедия. 12+
**27 май "Йыл миҙгелдәре"** (А.Вивальди), Денис Саттаров (скрипка), Владислав Мортазин (орган). 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**24 май "Легенда о воине дракона"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 0+
**27 май** - М.Кәрим ис. Милли йәштәр театры сәхнәһендә **"Метранпаж мажаралары"** (А. Вампилов), трагикомедия. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**26 май "Париж малайы"** Радмир Туйсиндың концерты. 6+

## БР Милли музейы

**25 май "Һуғыш геройы булған хайуандар"**. Интерактив экскурсия. 19:00. 6+

СПОРТ

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!

Өфө спортсыһы Эрнст Шәрәфетдинов 75 килограмм ауырлыҡ категорияһында карате буйынса Европа чемпионы исемен яулаһы. Яҡташыбыҙҙың еңеүе тураһында баш ҡаланың Калинин районы хакимиәте башлығы Ғәзизйән Әхмәтйәнов хәбәр итте. "Быйыл апрелдә Эрнст Шәрәфетдинов Ереванда Европа чемпионатына заявкаға инде. Турнирҙа ул үҙен бик яҡшы күрһәтте һәм алтын миҙал яулаһы. Эрнст - Өфөнөң Калинин районы 12-се олимпия резервындағы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, Рәсәй каратисы. Ул бер нисә тапҡыр донъя чемпионаты призеры, Европа һәм Рәсәй чемпионы, шулай мастеры статусы юғары әҙерлек кимәле һәм үҙ эшенә тоғролоғо хаҡында һөйләй", - тип яҙа Ғәзизйән Әхмәтйәнов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓ **"Салауат Юлаев һәйкәле беҙҙең республиканың үҙенсәлекле байлығы, - тине Радий Фәрит улы. - Ул үҙенә күрә бер символ, халыҡтың рухы. Һәйкәл беҙҙең гербта ла һүрәтләнгән. Хәҙер монумент авария хәлендә - был беҙҙе бик борсой".**

МӨҺИМ ХӘБӘР

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ - ДОНЪЯ МИРАҪЫ



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Художестволар академияһы президенты Василий Церетели менән осрашты һәм Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау мәсьәләһе тураһында һөйләште.**

- Салауат Юлаев һәйкәле беҙҙең республиканың үҙенсәлекле байлығы, - тине Радий Фәрит улы. - Ул үҙенә күрә бер символ, халыҡтың рухы. Һәйкәл беҙҙең гербта ла һүрәтләнгән. Хәҙер монумент авария хәлендә - был беҙҙе бик борсой. Бик күп ҡатмарлы һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙар булды, йәмәғәтселекте һәйкәлгә реставрация талап ителеүенә ышандыра алдыҡ. Техник экспертизабыҙ әҙер, алда торған план - эш башлауға рөхсәт алыу. Махсус комиссия йөмәғәт күҙәтеүе менән шөғөлләнәсәк. Һеҙҙең теләктәшлек өсөн рәхмәтлебеҙ, һәйкәлде реставрациялауҙа туранан-тура ҡатнашыуығыҙға иҫәп тотабыҙ.

Василий Церетели ышаныс белдереүгә рәхмәт әйтте һәм, Салауат һәйкәлен реставрациялауға Рәсәй Художестволар академияһының иң көслө белгестәре йәлеп ителәсәк, тип белдерҙе.

Түбәндә журналист һорауҙарына Рәсәй Художестволар академияһы президенты Василий Церетели һәм Рәсәй Художестволар академиһы академигы Александр Мирианашвили яуап бирә.

**Василий Зурабович, һеҙ Рәсәйҙәге күп кенә билдәле һәйкәлдәрҙе яңыртыуҙа ҡатнашҡанһығыҙ. Хәҙер, республика етәкселеге менән килешеү буйынса, Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялауҙа ҡатнашырға йыйынаһығыҙ. Һеҙҙең миссия нимәлә һәм ни өсөн тап хәҙер эштәрҙе башлау мөһим?**

**Василий Церетели:** Беләһегеҙме, Рәсәй Художестволар академияһы - илебеҙҙең иң күренекле рәссамдарын, архитекторҙарын, сәнғәт, мәҙәниәт эшмәкәрҙәрен берләштергән төп академия. Башҡортостан Башлығына беҙҙе был проектка консультант итеп саҡырған өсөн рәхмәтлебеҙ. Был бөтә ил өсөн мөһим миссия, сөнки Салауат һәйкәле - беҙҙең барыбыҙ өсөн дә мираҫ, һәм был бөйөк монумент өҫтөндә иң тәжрибәле белгестәр эшләһен өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ. Беҙҙең тәжрибәҙур, Храм Христа Спасителя кимәлендәге күп ҡомарткыларҙы реставрациялауҙа ҡатнаштыҡ, улар илдә генә түгел, ситтә лә эшләндә - шуға күрә был эш иң юғары кимәлдә башҡарылыр. Һеҙ, был эш кәрәкме, тип һорайһығыҙ. Тикшеренеүҙәр бер нисә йыл барҙы, һәм һәйкәлгә реставрация талап ителеүе асыҡланды. Эске конструкцияларға тиҙҙән 60 йыл була, улар ҙа яңыртыуға мохтаж. Реставрация мотлаҡ буласаҡ. Шикләнмәгеҙ, был - бөйөк сәнғәт әҫәре һәм республика символы, эштәр лайыҡлы кимәлдә башҡарылыр, тип ышандырам.

**Ә консультация нимәнән ғибәрәт? Һеҙ нимәләр эшләйәсәкһегеҙ?**

**Василий Церетели:** Рәсәй Художестволар академияһы тәү сиратта эксперт булараҡ сығыш яһай. Беҙ барыһын да, һәр деталде, һәйкәл өҫтөндә эшләргә рөхсәт ителгән кешеләрҙе, белгестәрҙе контролдә тотасаҡбыҙ. Иң яҡшы белгестәр һайлап алынған, улар Фәнни-тикшереү реставрация институты менән бергә билдәләнгән. Академияның, дәүләт учреждениеһы булараҡ, ғилми-тикшеренеү институты бар, беҙ илдең иң күренекле шәхестәрен берләштерәбеҙ, шуға күрә был эшкә айырыуса яуаплылыҡ менән ҡарайбыҙ.

**Александр Гурамович, эштең төп ҡатмарлығы нимәлә һәм реставрация сифатлы, ваҡытында үтһен өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

**Александр Мирианашвили:** Реставрация - һәр ваҡыт ҡатмарлы процесс. Айырыуса Салауат Юлаев һәйкәле кеүек уникаль объект менән эш иткәндә ауырлыҡтар йыш тыуа. Ул 60 йылға яҡын тора. Айырыуса тимер өлөшө ныҡ ҡына зыян күргән икәне күренә. Күптән түгел скульптураның эске яғы тикшерелде, унда ла ярыҡтар бар, бигерәк тә тимер конструкцияны тоташтырған урындар ныҡ зыян күргән. Былар барыһы ла ентекле эшкәртеүҙе, яңыртыуҙы талап итә.

**Һәйкәлдең ил һәм донъя өсөн тарихи, мәҙәни ҡиммәте нимәлә?**

**Василий Церетели:** Һәйкәл - донъяның музей ҡиммәтендәге бөйөк мираҫы. Ул ҙур сәнғәт оҫталығы менән эшләнгән, хәрәкәте, пластикаһы башҡа һәйкәлдәрҙә юҡ. Беҙ уға ҡарап, Салауаттың алышҡа ынтылыуын күрәбеҙ. Был - бөтә Ер шары өсөн ҡиммәтле сағылыш. Шуға күрә, яңынан ҡойоу түгел, ә тап ошо мираҫты, художество үҙенсәлеген, пластикаһын һаҡлап тергеҙеү мөһим. Һәйкәл Санкт-Петербургта урынлашҡан һәм Рәсәй Художестволар академияһына ҡараған "Монументскульптура" заводында ҡойолған. Реставрациялауҙа 60 йыл элек һәйкәлде ҡойған кешеләр ҙә ҡатнашасаҡ. Академия президиумы ағзаһы Геннадий Степанов завод директоры булған, ул һәйкәлде нисек ҡойғандарын хәтерләй. Реставрация бында, республика биләмәһендә, үтәсәк, һәйкәлде ситкә алып китмәйәсәктәр.

ТЕЛҺӨЙӘР

## ҺЫЙҒЫР ТЕЛЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе башҡортсаға ауҙарыу буйынса фекер алышыу социаль селтәрҙә йыш осрай, үҙебеҙҙә яңырыраған яңы һүҙҙәр тәҡдим ителә. Ошо хәл бик тә ҡыуандыра: тимәк, телебеҙҙе үҫтереүгә, яҡлауға ынтылыш бар. Иҫкергән һәм һирәк ҡулланылған һүҙҙәргә лә яңы һулыш биреү туған телебеҙ байлығын яҡлау-һаҡлауға хеҙмәт итә.**

**Һыҙлыҡ.** "Ваҡ ҡына итеп ныҡ ҡурылған майлы ит йә ит майы" тигән мәғәнәһе яҡшы билдәле. Теште тәрбиәләүҙә ҡулланылған әйберҙә ҡарата ла ошо һүҙ бик тура килә. *Ҡауырһын һыҙлыҡ. Теш ҡаҙнаһын яраламаҫ өсөн, һыҙлыкты һаҡ тотоналар.*

**Һыҙғыс.** Бер нисә мәғәнәгә эйә һүҙ. Тәүгеһе - "скрипканың смычогы" - телдә күптән нығынған. *Мәҫәлән: Скрипкаға яңы һыҙғыс кәрәк.* Ә "һыҙғыс" тип шырпыны атау диалектка хас. *Һунарсы һыҙғысы. Һыҙғысты ҡоро урында тоталар.* Шулай уҡ "линейка" тигән һүҙҙе "һыҙғыс" тип атау ҙа беҙҙенсә булыр. *Тегенсе һыҙғысы. Һатыусы һыҙғыс менән тауар үлсәй.*

**Һыйғыр.** "Һыйғыр" - "һығылмалы" тигәнгә мәғәнәһе бик яҡын һүҙ. *Һыйғыр сыбыҡ. Һыйғыр ағас һынып бармаҫ.*

**Һыйҙыҡ.** Ҡайһы бер һөйләштә ҡәҙерлегә, йәғни, ҡунаҡҡа, тантанаға кейә торған әйбергә ҡарата ҡулланылған һүҙ. *Һыйҙыҡ кейем. Сығарылыш кисәһенә һыйҙыҡ күлдәк тектереү.*

**Һыйҙаш.** Ҡунаҡтар бер-береһенә ҡарата һыйҙаш була. *Табында таныш һыйҙаштар йәнәшә ултырҙыҡ. Һыйҙаш менән ихлас аралаштыҡ.*

**Шулай итеп, һыйғыр телле, йор һүҙле булайыҡ, дуҫтар.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АШЫҠҠАН АРБА...
### аҡрын тәгәрәй

Ултырған ҡыҙ урынын табыр, ашыҡҡан ҡыҙ ирһеҙ ҡалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мода ваҡытлы ғына күренеш, ә зауыҡ мәңгелек.

**(Ивсен Лоран).**

Әгәр ҙә был тойғоно тәүге тапҡыр кисерәһең икән, уның ысын мөхәббәтме, түгелме икәнен тикшереүе бик ҡатмарлы.

**(Зигмунд Фрейд).**

Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын: әҙәби геройҙар менән тулы дәүләттә йәшәгән кешеләр менән ни булыр ине икән?

**(Джозеф Аддисон).**

Профессионал - үҙенә оҡшамаған эште лә бынамын тигән итеп башҡарыусы.

**(Алистер Кук).**

Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ ир-егеткә "Һин иң аҡыллыһы" тип әйтә икән, ул, тимәк, башҡа быныһ һымаҡ ахмаҡты тапмаясағына инанған.

**(Фаина Раневская).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ уҡыусыһы Уҡытыусыһынан:**

**- Кешелә нимә мөһимерәк: тышҡы матурлыҡмы, әллә эске матурлыҡмы? - тип һорай.**

**Уҡытыусы һорауға ҡаршы һорау бирә:**

**- Әйт әле, бына һин йорт һатып алырға уйланың, ти. Ике вариант бар: береһе - тыштан матур, ә эстән бик уҡ йыйнаҡ һәм уңайлы түгел. Икенсеһе - тыштан бик уҡ матур түгел, әммә эстән йыйнаҡ һәм йәшәү өсөн уңайлы булған йорт. Һин уларҙың ҡайһыһын һайлар инең?**

**- Мин тыштан бик уҡ матур булмаған, әммә эстән уңайлы һәм йыйнаҡ йортто һайлар инем...**

**- Ә бына үҙенең вазифаһы менән маһайырға ятҡан кеше ҡайһы йортто һатып алыр ине икән? - тип һораған тағы Уҡытыусы.**

**- Ул, моғайын, тышҡы матурлыҡҡа өҫтөнлөк бирер ине, - тигән уҡыусы.**

**- Һин хаҡлы тип уйлайым, - тигән Уҡытыусы. - Ләкин һеҙҙең һәр берегеҙ ваҡыт үтеү менән үҙенә нимә етмәгәнен аңлаясаҡ һәм үҙенә етмәгәнде - кемдер матурлыкты, кемдер уңайлыкты - табырға ынтыла башлаясаҡ.**

**- Тимәк, тышҡы һәм эске матурлыҡ асылында бер тигеҙ һәм улар гармонияла булғанда ғына ҡиммәтле? - тигән уҡыусы.**

**- Шулай тиергә лә була, - тигән Уҡытыусы. - Ләкин мин быны икенсерәк итеп аңлатмаҡсымын: өлөштөң яртыһын эләктергән кеше уның икенсе яртыһын да табырға, бөтөнлөккә ынтылырға тейеш. Ярты ярты була инде..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25020

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 968